✓ *Аҡыл - ул тар булғанды киңәйтеү, киң булғанды бәләкәйләтеү, бер-береһенә оҡшағанды күбәйтеү һәм күҙимге генә нәмәләргә ҡыҙыҡһыныу уятыу.*

*(Квинтилиан).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№5 (527)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Шәректән - ғәребкәсә,**

йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы



7

**Мода артынан эйәреп кенә...**

ысын юрист булып булмай



8-9

**Ауылдарға...**

йышыраҡ ҡайтайыҡ



11

**Алпамышалар эҙе...**

Бөрйәндә лә һаҡлана



12

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Йәмғиәттең ниндәй булыуы ололарға ҡарата мөнәсәбәттән дә күренә. Өлкән быуындың бөгөнгө хәлен нисек баһалайһығыҙ? Таныштарығыҙ һәм туғандарығыҙ араһында, шулай уҡ ғаиләгеҙҙә өлкәндәргә мөнәсәбәт нисек?*

***Рөстәм ҒАТАУЛЛИН, Өфө ҡалаһы:*** Кеше үҙ тормошон һәр ваҡыт сағыштырыу аша баһалай. Мин дә бик йыш ошо хаҡта уйланғаным бар. Оло быуын вәкилдәренең бала сағы аслы-туҡлы, яланғас осорға тура килгән, күптәренең атайҙары Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтмаған. Шулай булһа ла, өлкәндәр бөгөнгө көнгә ризаһыҙлыҡ белдермәй, барына шөкөр итеп, беҙ күргәнде йәштәргә күрергә яҙмаһын, тигән теләк менән йәшәй. Шулай ҙа тел төптәрендә әйтеп бөтөлмәгән һүҙҙәр ҡалғанын шәйләйем. Атайҙары һуғышта үлеп ҡалған апай-ағайҙарҙың йөҙҙәре айырыуса моңһоу. Хәйер, бының сәбәптәрен аңлауы ҡыйын түгел. Етем үҫкән бер ағай шулай тип әйткәйне был хаҡта: "Беҙ атай-әсәй наҙын күрмәнек. Атай һуғышта хәбәрһеҙ юғалды, әсәй беҙҙе астан үлтермәйем тип, үҙе аслыҡтан миктәне. Атайлы йәштәштәремдең тормошо бөтөнөрәк, тамаҡтары туғыраҡ булды, әле лә дәүләт ярҙамынан ташламай уларҙы. Ә беҙҙең атайҙарҙың һөйәктәре лә шартына килтереп ерләнмәгән - Европа буйлап һибелеп ята. Ҡәберҙәрен зыярат ҡылырлыҡ та мөмкинлегебеҙ юҡ". Был һүҙҙәр янына алдынғы булып иҫәпләнгән илдәр менән сағыштырманы ла ҡушып, беҙҙең йәмғиәттең ололарға ҡарата мөнәсәбәтен юғары кимәлдә, тип әйтә алмайым. "Ҡәнәғәтләнерлек" билдәһе генә ҡуйырға булалыр. Баһа шулай ҙа шунан түбән төшмәһен ине, тием. Ололар тормошон яҡшыртыу хаҡында күберәк хәстәрләргә кәрәк. Хөкүмәттең - аҡсаһы, кешеләрҙең илтифатлығы юҡ түгел, бар ул. Тик әлеге лә баяғы, хәстәрлек күрәбеҙ, тигән булып, өлкән йәштәгеләрҙең сабый күңеленә тиң нескә уй-тойғоларын рәнйетеүҙән һаҡ булайыҡ, тимәксемен.

Үҙебеҙҙең хәлдәргә килгәндә, 73 йәшлек әсәйем ауылда йәшәй. Ай һайын янына ҡайтып йөрөйөм, көн аша шылтыратып, хәлен белешеп торам. Ағайым менән һеңлем дә шулай итәләр. Балаларыбыҙ ҙа, өләсәй, тип әсәйем янына барып ҡайтырға атлығып торалар. Күршеләре әсәйемә:"Һин бәхетле, балаларың гел яныңда", - тип әйтәләр икән. Эйе, оло кешенең бәхете, ысынлап та, шунан ғибәрәт: дәүләт яҡлауынан, балалары иғтибарынан һәм ихтирамынан мәхрүм булмау. Ҡартлыҡ бер заман беҙҙең тупһаға ла килеп, ишек шаҡыр, шуны онотмайыҡ: өлкәндәргә шәфҡәтлерәк булайыҡ.

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, педагог, хеҙмәт ветераны:*** Йәмғиәтебеҙҙең ниндәй булыуы халыҡ тормошонда сағыла. Ғүмер буйы балалар менән эшләгән кеше булараҡ, мине бөгөн бигерәк тә йәштәр менән ололар араһындағы әхлаҡ упҡынының тәрәнәйә барыуы уйға һала. Өлкән быуын вәкилдәренең күпселеге үҙҙәренең күңеленә һеңгән, үҙҙәренең асылы булған рухи ҡиммәттәр менән йәшәүен дауам итһә, йәштәрҙең был турала төшөнсәләре бөтөнләй икенсе. Атай-әсәйгә, Тыуған илгә, хеҙмәткә беҙҙең мөнәсәбәт изгеләрҙән-изге була килде, ә бына йәш быуын бөтә нәмәгә матди күҙлектән, ижад итеүсе түгел, ә ҡулланыусы булараҡ ҡарай. Элек беҙ бәләкәй саҡта ҡыҙҙар - уҡытыусы, малайҙар һалдат булырға хыялланып үҫтек. Хәҙер балаларҙа ундай хыял юҡ. Бер танышымдың 6 йәшлек ейәне иҫемә килеп төштө: мин ниндзя булам, тип йөрөй ул гел генә. Ҡыҙҙар бөтәһе лә модель булып, бай кейәүгә сығырға хыяллана. Тағы бер танышым ейәне ҡылығын мәҙәк итеп һөйләп торҙо яныраҡ. "Ҡартатай, һин ҡасан үләһең, машинаң миңә ҡалыр ине", - тип әйтә икән был сабый уға. Бында көлөргә түгел, иларға кәрәклеген белмәгән ҡартатайҙар үҙҙәре шулай "тәрбиә" биргән, күрәһең, балаларына. Тормоштары бик ҡыҙыҡтан булмаған "мәҙәккә" әүерелгән шундай өлкәндәр ҙә йәшәй арабыҙҙа. Тора-бара, ейән үҫә төшкәс, ҡартатай һәм өләсәйҙәр әлегеләй "мәҙәк"тәрҙән фажиғә килеп сығыуын һиҙмәй ҙә ҡалалар. Ҡарттарҙы йәберһетеп, аҡса таптырып, пенсияларын талап, өйөнән ҡыуып сығарырға ла күп һорамай ундай балалар ахыр сиктә. Кем ғәйепле? Заманаһы шундай, тип , бөтә нәмәне заманыбыҙға япһарып ҡуя шул саҡ ундайҙарҙың күбеһе. Ә бит бөтөн яуызлыҡ, йыртҡыслыҡ кеүек үк, бөтөн изгелек һәм юғары әхлаҡлылыҡ та ғаиләнән башлана. Тәрбиә эшен мәктәпкә, заманға, сит идеологияға килтереп теркәп, һылтау, аҡланыу эҙләмәй, ғаиләнән башларға кәрәк, тимәксемен. Ғаиләһе ныҡтың иле лә ныҡ, тип юҡҡа ғына әйтелмәгән бит.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЯҘМЫШ БҮЛӘГЕ, ТИҘӘР...

## Башҡорт лицейында уҡыуҙы

**Республика Башҡорт лицей-интернаты ойошторолоуға ике тиҫтә йыл ғына әле, шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул инновациялар индереү буйынса Рәсәйҙә иң алдынғы мәктәптәр исемлегендә. Лицейсыларҙы бөгөн күп ерҙә танып беләләр. Улар төрлө компанияларҙа, фән өлкәһендә, бизнеста, Хөкүмәт аппаратында, ҡала, район хакимиәттәрендә уңышлы эшләйҙәр. Рәсәйҙең күп төбәктәрендә һәм донъяның төрлө илдәрендә белем алалар, тәжрибә туплайҙар. Лицейҙың тағы ла бер үҙенсәлеге - уның диуарҙарында тәрбиәләнгән етди ҡарашлы, маҡсатлы, рухлы егеттәр аҙаҡтан да үҙҙәренә белем биргән уҡыу йорто һуҡмаҡтарын онотмайҙар. Даими рәүештә лицейҙың яҙмышы менән ҡыҙыҡһыналар, ҡулдарынан килгәнсә ярҙам итеп торалар. Белем усағы бөгөн нисек йәшәй һәм киләсәккә ниндәй маҡсаттар ҡуя? Уңыштар сере нимәлә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуапты лицейҙың тарих биттәрен яҙған кешеләр менән бергәләп эҙләйек.**

**(Дауамы 5-6-сы биттәрҙә).**



Башҡорт лицей-интернатының тағы бер ғорурлығы - робот техникаһы туңәрәге.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӘМӘКЕГӘ КӨН БӨТӨҮЕН...

## 2017 йылға тиклем һуҙыуҙары насар

**РФ Дәүләт Думаһы депутаттары сәләмәт тормош алып барыусылар өсөн күптән көтөлгән закон ҡабул итте. Насар ғәҙәткә эйә булғандар әлегә тиклем үҙҙәренең генә түгел, ә яндарында булған һәр кешенең һаулығын ҡаҡшатыу өҫтөндә әүҙем "эшләне". Шуға күрә яңы закондың йәмғиәтте тәмәке төтөнөнән азат итеүенә ышаныс ҙур.**

Яңы законға ярашлы, әлегә тиклем тәмәке тартыу өсөн бүлмәләре булған дәүләт ойошмалары был махсус урындарҙы ябырға тейеш. Ә бик тә тәмәке көйрәтергә теләгәндәргә иһә урамға сығырға кәрәк буласаҡ. Ләкин был осраҡта ла улар мәктәп, йәмәғәт транспорты туҡталыштарынан алыҫ булырға тейеш. Шулай уҡ был ҡағиҙә вокзалға инеү урындарына, тимер юл вокзалы платформаларына, мәҙәниәт, спорт, һаулыҡ һаҡлау учреждениеларына ла ҡағыла. Күп ҡатлы йорттарҙың лифттарында, подъездарында көйрәтергә яратыусыларға ла бынан һуң йә өйөндә, йә урамда тартырға тура киләсәк. Тәмәке тартырға ярамаған урындарҙы Рәсәй төбәктәре шулай уҡ үҙ ҡарамағынан сығып та билдәләү хоҡуғына эйә, шуға күрә был исемлектең тағы ла ҙурайыуы бар.

Депутаттарҙың был ҡарары тәмәке тартыусыларҙың ғына түгел, ә тәмәке етештереүселәрҙең дә күңеленә ятмауы көн кеүек асыҡ. Ниндәйҙер тауарҙы етештереү генә аҙ, килем алыу өсөн уны масштаблы рәүештә рекламалау мөһим. Яңы закон иһә тәмәкегә ҡағылышлы һәр рекламаны тыя. Улай ғына ла түгел, бынан һуң фильмдан тәмәке тартыусы герой тураһындағы кадрҙы алып ташларға, йырҙан тәмәке хаҡындағы юлдарҙы һыҙып ташларға ла мөмкин буласаҡ.

Ләкин, әйтергә кәрәк, закон тарафынан билдәләнгән тыйыуҙар әле үк эшләй башламаясаҡ. Уларҙың ҡайһыныһылыр 2014 йылдың 1 июненән, ә ҡалғандары иһә тағы ла һуңғараҡ - 2017 йылдың 1 ғинуарынан ғына үҙ көсөнә инәсәк. Йәл, бөгөндән кәрәк ине уның ғәмәлгә ашырылыуы. Ә 2017 йылға тиклем күпме ғүмерҙәрҙе ҡыясаҡ әле был тәмәке-сабакы.

# ХОСУСИЛАШТЫРЫУ ВАҠЫТЫ...

## тамамланыуға бара

**Ағымдағы йылдың 1 мартында граждандар тарафынан дәүләт һәм муниципаль торлаҡ фонды ҡарамағындағы торлаҡ йорттарҙы хосусилаштырыу юлы менән шәхси милеккә күсереү ваҡыты тамамлана.**

Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса Росреестр идаралығы етәксеһе Игорь Шеляков белдереүенсә, 1998 йылдан алып торлаҡты хосусилаштырыу хоҡуғы менән 650 мең тирәһе кеше файҙаланған. Бушлай хосусилаштырыуҙы тамамлау ваҡыты бер-нисә тапҡыр күсерелде, ләкин 2013 йылдың 1 мартынан һуң ул оҙайтылмаясаҡ. Шуға күрә торлаҡтарын хосусилаштырырға теләүселәргә ашығырға кәрәк.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Йәмғиәттең ниндәй булыуы ололарға ҡарата мөнәсәбәттән дә күренә. Өлкән быуындың бөгөнгө хәлен нисек баһалайһығыҙ? Таныштарығыҙ һәм туғандарығыҙ араһында, шулай уҡ ғаиләгеҙҙә өлкәндәргә мөнәсәбәт нисек?*

(Башы 1-се биттә).

*Фәтхулла ИШБИРҘИН, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:* Йәмғиәттең хәле уның ҡарттарға булған мөнәсәбәтенән сығып баһалана, тип бик дөрөҫ әйтәләр. Тап ошо мөнәсәбәттә күренә лә инде йәмғиәттең дөйөм цивилизация донъяһында тотҡан урыны. Был уның социаль-иҡтисади ҡеүәтен генә түгел, күп йәһәттән ижтимағи аң, мәғрифәтлелек ҡеүәһен дә, мәҙәни-әхлаҡи үҫеш кимәлен дә күрһәтеүсе фактор. Киләсәге өмөтлө, кешелекле йәмғиәттә ҡарттар хәйерсе хәлендә михнәт сигеп көн күрмәҫ. Ҡартлыҡ барыбер бәхетле була алмай, тип, бер яҡтан, дөрөҫ әйтәләр, ләкин ул тейешенсә тәьмин ителгән, етеш, тыныс, яҡты, ҡыуанысл, сыуаҡ була ала һәм шулай булырға тейеш тә. Үкенескә күрә, тормошобоҙҙа күбеһенсә шуның тап киреһен күрергә тура килә. Өлкән йәштәгеләрҙең күпселеге фәкирлектә, аҡтыҡ тиндәрен иҫәпләп көн итә: 7-8 мең һум пенсия аҡсаһына ай буйына йәшәргә лә, дауаланырға ла, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләргә лә, ҡапыл килеп тыуған сығымдарға тотонорға ла тура килә. Пенсияны дәүләт, хәйер аҡсаһылай, онотҡанда бер, унда ла тинләп кенә арттыра ла, был хаҡта ҙур хәбәр итеп һөйләргә ярата, ә ниңә һуң уны бер тапҡыр һәм берәгәйлерәк итеп арттырмаҫҡа? Юлдарын ихласыраҡ эҙләгәндә, ресурстар табылыр ине, моғайын. Мәҫәлән, әле бына ил профсоюздары тәҡдим иткән "антиваучер" идеяһы ҡыҙыҡлы күренә: ул дәүләт милкенән тупланған килемде халыҡҡа бүлгеләп, таратып биреүҙе күҙҙә тота. Бынан тыш, дәүләт милкен "прихватизациялап" байыған олигархтар ҙа миллиондарын халыҡ менән уртаҡлашырға тейештәр, минеңсә. Был өлкән быуын вәкилдәренә дәүләт мөнәсәбәте тураһында булды. Халыҡ мөнәсәбәтенә килгәндә иһә, мин уны өлкәндәргә ҡарата насар тип әйтмәҫ инем. Төрлөсә булып китә, әлбиттә. Айырыуса йәштәрҙең бөтәһе лә өлкәндәргә ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтә, тип әйтеп булмай, сөнки мәктәп хәҙер тәрбиә мәсьәләләре менән шөғөлләнмәй, ғаиләләрҙең дә төрлөһө бар. Әгәр бала өлкәндәргә кеселекле, ихтирамлы мөнәсәбәтте ғаиләһендә күреп, шул мөхиттә тәрбиәләнә икән, тимәк, йүнле кеше булып үҫәсәк. Ә ҡайҙа ҡартатай йә өләсәйҙең пенсияһын ҡурҡытып, талап алып, эшләмәйенсә, улар елкәһендә йәшәйҙәр, былдай йортта бала түгел, ә яуызлыҡ һәм енәйәт ярала, тимәк. Ә былай көндәлек тормошта: урамда, транспортта, сиратта ололарҙы кәмһеткән, ҡыйырһытҡан осраҡтарҙың шаһиты булырға тура килгәне юҡ һәм булмаһын да.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**"Киске Өфө"гә яҙылырға өлгөрмәнем, тип үкенеүселәр юҡмы арағыҙҙа? Улар 17 февралгә тиклем яҙылһа, гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлаясаҡ икәнен иҫкәртегеҙ, зинһар. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә дүрт айға 240 һум 16 тингә яҙылып була.**

**Иҫкәртеү.** Почталарҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Октябрьский ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "ВИМ-АВИА" компаниялар төркөмө башлығы Рашид Мурсекаев менән һөйләшеүҙәр үткәрҙе. Осрашыуҙа "Өфө" халыҡ-ара аэропортында төп авиакомпания булдырыу мәсьәләләре тикшерелде. Билдәләнеүенсә, "Өфө" аэропортында яҡын арала халыҡ-ара терминал төҙөй башлау планлаштырыла, сөнки сәғәтенә 200 пассажирҙы хеҙмәтләндергән бөгөнгө терминал заманса талаптарға яуап бирмәй. Буласаҡ терминал сәғәтенә 500 кешене хеҙмәтләндерәсәк, был ҙур сираттарҙан ҡотолорға ярҙам итәсәк. Шулай уҡ "Өфө" аэропорты биләмәһендә ҙур самолеттар ҡуйыу өсөн перрон төҙөү планлаштырыла.

✓ 31 ғинуарҙа Мәскәүҙә Башҡортостан Хөкүмәте менән Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе, сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштарыбыҙ эштәре һәм халыҡ-ара гуманитар хеҙмәттәшлек буйынса федераль агентлыҡ араһында килешеү төҙөлдө. Документҡа БДБ эштәре буйынса федераль агентлыҡ етәксеһе Константин Косачев һәм Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы. Килешеүгә ярашлы, яҡтар сит илдәрҙә йәшәгән яҡташтарға һәм уларҙың берләшмәләренә ярҙам итеү буйынса программа һәм проекттарҙы тормошҡа ашырыу, улар менән бәйләнеш булдырыу, Башҡортостандың халыҡ-ара хеҙмәттәшлек итеүенә булышлыҡ итеү, уның халыҡ промыслаларын Рәсәйҙән ситкә сығарыу кеүек төп йүнәлештәр буйынса хеҙмәттәшлек тураһында килеште.

✓ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев республика парламентының 59-сы ултырышында "2012 йылда Башҡортостан Республикаһы ҡануниәте торошо тураһында"ғы доклад менән сығыш яһаны. Константин Толкачев төбәк парламентарийҙары алдында граждандар хоҡуҡтарын яҡлауҙы тәьмин итеү бурысы тороуын билдәләне. Халыҡты һәм территорияларҙы ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән һаҡлау, янғын һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, социаль өлкә мәсьәләләрен көйләгән закондарға үҙгәрештәр индереү алдағы осорға эшмәкәрлектең өҫтөнлөклө йүнәлештәре буласаҡ, тип билдәләне республика парламенты спикеры.

ШАҢДАУ

# КҮҢЕЛДӘРҘЕ...

## ҡурҡыу хисе биләгәндәй

**Гәзитебеҙҙә Илгизәр Диҡҡәттең "Рух ҡошо" тип аталған риүәйәтен уҡып һоҡландым. Милли рух хаҡында бик күптәр уйлана, хафалана. Минең уйымса, Рух хисе әҙәмдең ҡанында йәшәй. Ул хис йә була, кеше менән бергә тыуа, үҫә, ныға, уны тояһың, йә ул хис бөтөнләй булмай. Ҡандан ҡанға күсә ул.**

Бына минең һабаҡташым Әнүзәнең: "Башҡорт рухын мәктәптә, башҡорт әҙәбиәте дәресендә, уҡытыусыбыҙ Зайлалова апай ҡобайыр уҡыған сағында тойҙом. Апайҙың тауышы, телебеҙҙең һуты, ҡобайырҙың камиллығы күңелемде шул тиклем нык тулҡынландырҙы, хатта йөрәгемдең дөпөлдәп тибеүен һиҙҙем һәм күтәрелеп ҡарарға ла ҡурҡып ултырҙым. Күтәрелеп ҡараһам, минең күҙҙәремдән, йөҙөмдән нур сәселеп тороуын күреп ҡалырҙар ҙа, аптырарҙар һымаҡ тойолдо миңә", - тип һөйләүе әле лә иҫемдә.

Ә мин үҙемдең ҡанымдағы башҡорт рухын һағыныу хисе аша һиҙҙем. Илемдән ситтә, Мәскәү ҡалаһында уҡып йөрөүемә ул саҡта ярты йыл самаһы булып киткәйне. Беренсе курста "Уҡып китә алырмынмы?" тигән уй борсой бит инде. Шуға башкөллө уҡыуға сумаһың. Һәйбәт кенә уҡып киттем, һәйбәт баһалар алам. Бер көн уҡыуҙан ҡайтып барһам, ниндәйҙер һағышлы хәүеф хисе биләп алды. Бында, янымда, башҡортса һөйләшкән берәү ҙә юҡ. Урыҫса һөйләшеп йөрөп, үҙ телеңде онотоп ҡуйыуың бар бит. Хатта китеп барған ерҙән туҡтап, "кояш", "ҡар", "сәскә" тип, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе әйтеп ҡараным. "Юҡ, үҙ туған телемде онотоу юҡ", тип, икенсе көндө үк почтаға барып, "Ағиҙел" журналына яҙылдым. Бына шул һағыныу хисе лә ҡандағы ойоп торған рух хисен уяталыр. Бәлки, әлеге йәштәр ышанмаҫ та: ул саҡтарҙа Мәскәүҙә "Литература народов СССР" тип аталған китап магазины ла бар ине. "Башҡортостан" бүлеген табып, Әнғәм Атнабаев, Мостай Кәрим, Назар Нәжми һәм башҡа авторҙарҙың китаптарын һатып ала инем. Һирәк булһа ла радио аша бөтә илгә башҡорт халыҡ йырҙарын яңғыраталар. Ул көндәрҙә мин үҙемде айырыуса бәхетле кеше итеп тойоп йөрөйөм, сөнки мин шундай моңло халыҡтың вәкиле бит! Уҡыу йортон тамамлағас, миңә уҡытыусы булып ҡалырға тәҡдим иттеләр, ләкин мин: "Рәхмәт, минең үҙ илем бар, мин илемде һағынам", - тинем. "Ғүмерем буйы бында иностранка булып йәшәгем килмәй", тигән яуапҡа аптырағалар ҙа, һоҡланыуҙарын тойҙом.

Тик үҙ илемә ҡайтҡас, Башҡортостаныма бик күп милләттәр килеп тулыуын күрҙем. Эшкә урынлашып, эшләп китеүе ауыр булды. Урамдарҙа башҡортса һөйләшеү бөтөнләй ишетелмәне тиерлек. Әхмәт Сөләймәнов "Киске Өфө"бөҙҙә: "Баҡылдай, баҡылдай йыландың ауыҙына инеп барабыҙ", - тип дөрөҫ яҙҙы. Ниндәйҙер гипноз беҙҙе ойотоп, телде лә, моңдо ла онottороп, "совет милләтенә" әйләндерен бөтөрөп бара ине. Шунан һуң бер аҙ ғына уянып алдыҡ ул. Хәҙер бына тағы хәүеф баҫып алды: Башҡортостанда башҡорттар аҙәйә бара. Белемле, әүҙем йәштәр сит тарафтарҙа уңышлы эш урыны табып, атайәсәйҙәрен үҙ янына күсереп алып китә. Рух хисе түгел, ҡурҡыу хисе биләгән күңелдәрҙе. Илгизәр Диҡҡәт иң рухлы улдарға, ҡыҙҙарға өмөт бағлай бағлауға. Тик был юлы беҙгә Үҙәктең дөрөҫ милли сәйәсәткә йүнәлтелгән эшмәкәрлеге генә ярҙам итә алыр кеүек тойола...

Әйткәндәй, тағы бер ҡыҙыҡ ҡына хәтирәм менән уртаҡлашайым әле. Мин институтта уҡып йөрөйөм. Мәскәү өлкәһе Орехово-Зуеволағы училищела туҡыусы һөнәренә уҡып та, эшләп тә йөрөүсе әхирәттәрем Римма менән Нәйлә, эш хаҡы алһалар, күстәнәстәре менән миңе ҡыуандырып китәләр. Бер осрашыуҙан һуң мин уларҙы оҙата сыҡтым. Юл ыңғайында А.С.Пушкин музейына инеп сығырға булып, метроға йүнәлдек. Вагонға индек. Римма рәхәтләнеп башҡортса һөйләшә, мин уны тыям: "Башҡортса һөйләмә, башҡалар аңламай бит..." - тим. Ә Римма бөтәһе лә ишетерлек итеп: "Ике телдә лә, башҡортса ла, урыҫса ла һөйләшә белеүем менән ғорурланам", -тип әйтеп тә өлгөрмәне, бер иҫерек ир: "Әллә һеҙ ҡытай балаларымы?"- тип ҡысҡырҙы. Беҙ шымып ҡалдыҡ. Ул ваҡытта Ҡытай менән дошманлаша башлағайны беҙҙең ил. Тик вагондағы бөтөн халыҡ геү килешеп беҙҙе яҡларға тотондо. Вагондан төшкәс, Риммабыҙ иҫе лә китмәй генә: "Күрҙегеҙме, бөтә вагон халҡы беҙҙе яҡланы, сөнки башҡорт теле йомшаҡ һәм моңло",- тип йомғаҡ яһап ҡуйҙы...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

# ӨС КӨНЛӨК ДОНЪЯНЫҢ...

## ҡәҙерен ебәрмәйек

**Һуңғы осорҙа ахырызаман тураһында бик күп имеш-мимештәр яҙалар, һөйләйҙәр. Беҙ бала саҡта ла оло инәйҙәр:**

- Харам эш ҡылмағыҙ, тәртип боҙмағыҙ: ер йөҙөндә боҙоҡлоҡ күбәйһә, аҡса, алтынға талаш-үлеш булһа, ахырызаман килер, - тип беҙҙе яман эштән тыйыр инеләр.

-Нисек була һуң ул ахырызаман ? - тип ҡыҙыҡһынабыҙ.

-Тау ҙа булмаҫ, һыу ҙа булмаҫ, ағас та ҡалмаҫ. Ер типтигеҙ булыр, өҫтөнән йомортҡа тәгәрәтеп ебәрһәң, туктамай тәгәрәр. Бик әҙ кеше ҡалыр. Аяҡ аҫтында алтын ағып ятыр, кешегә әсәр һыу булмаҫ. Кешелә алтын ҡайһыбулмаҫ, һыу эҙләр. Һыуға сарсап үлерҙәр...

Шул һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәһең дә уйға ҡалаһың. Уйланырлыҡ шул. Тәбиғәтте аямайбыҙ, рәнйетәбеҙ. Ә үҙебеҙгә берәйһе оҡшамаған һүҙ әйтһә, йөҙ тәрлө яуап ҡайтарабыҙ. Ә тәбиғәт беҙгә шулай яуап бирһә?

Ергә йондоҙ төшә икән, тигән хәбәрҙәрҙе лә йыш ишетергә тура килә. Шуға ҡағылышлы ваҡиғаны Йылайыр районы Юлдыбай ауылында һаман да иҫләп һөйләүселәр бар. Бына бер ваҡыт, ергә йондоҙ төшә, тигән хәбәр тарала, бөтә кеше йондоҙҙоң ергә төшөүен шомланып көтә. Рәҡиә әбей йоҡа ғына кумәс бешереп, улдарына сәй эсерә лә, ҡалған кумәсте стенаға ҡағылған кәштә башына һалып ҡуя. Ҡараңғы төшә. Әбей улдары Хөснитдин, Абдрахман менән, йоҡламайынса, күктән йондоҙ төшөүен көтә. Бер аҙҙан Рәҡиә әбей стенаға һөйәлеп йоҡлап китә. Күпмелер ваҡыт үткәс, дөбөр-шатыр килгән тауышҡа уянып китә лә:

- Ергә йондоҙ төштө! Ергә йондоҙ төштө! - тип ҡысҡыра икән. Улы Хөснитдин:

- Төштө ти бына йондоҙ! Әптерең кәштә менән бергә иҙәнгә ҡолап төштө! - ти.

Баҡтиһәң, Абдрахман бая әсәһе һалып ҡуйған кумәсте сәлдерергә уйлап, кәштәгә үрмәләгән һәм осоп төшкән икән. Күктән йондоҙ төшөүен көтөү ваҡиғаһы оҙаҡ ваҡыт Абдрахмандың кәштә менән бергә ҡолауы ваҡиғаһына бәйләп һөйләп йөрөтөлә Йылайыр яҡтарында...

Аллаға шөкөр, был юлы көткән ахырызаман да булманы. Ләкин ул беҙҙе уйланырға, һығымталар яһарға, һәр кемде үҙ ҡылығына, эштәренә баһа бирергә мәжбүр итте. Милләттәштәремә әсәйем мәрхүмә һүҙҙәре менән, был донъя өс көнлөк кенә, ҡәҙерен белеп, ҡәҙеребеҙҙе ебәрмәй йәшәйек, тип әйткем килә.

**Флүрә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**
**Миәкә районы Биҡҡол ауылы.**

# АТТАР ЮЛ БИРМӘҺӘ...

## бүре олот!

**"Киске Өфө"гәзитенең былтырғы 41-се һанында Бөрйән районынан Таңһылыу Баһауетдинованың "Аттар, эттәр, һыйырҙар - тояҡлы юлбаҫарҙар" тигән мәҡәләһе баҫылғайны. Унда, башлыса, өйөр менән йөрөгән аттарҙың машиналарға юл бирмәүе хаҡында һүҙ барғайны.**

Үткән йәй Магнитогорск ҡалаһына барғанда ҡоштарҙың, йәнлектәрҙең, йыртҡыс хайуандарҙың тауыштары яҙылған диск һатып алғайным. Уны өйҙә тыңлап ятһаң, үҙеңде тәбиғәт ҡосағындағылай хис итәһең. Ҡыштың оҙон төндәрендә һандуғас һайрауын, кәкүк моңайыуын тыңлап кинәнәм.

Бер көндө шул диск менән тәжрибә яһамаҡсы булдым. Башҡа ваҡытта төндә урам буйлап йөрөргә тура килһә, эттәр, тешләмәһә лә, ҡаршыға өрөп сығып, теңкәгә тейә торғайнылар. Тәүҙә берәһе сыға, уның артынан икенсеһе күренә, шунан өсөнсөһө, дүрсенсеһе лауылдап өрөргә тотона һәм бер аҙҙан бөтә ауыл эттәре был хорға ҡушыла. Бер көндө кис үҙем менән магнитоланы алып сыҡтым. Тәүге эттең өрөп сығыуы булды, баяғы дискты ебәрҙем, уның әйләнеше тап бүреләр олоуына тура килде. Эт, бахыр, күҙ менән каш араһында ҡайҙалыр юҡ булды. Бара бирәм дә, бүре олотам, бара бирәм дә олотам, бер нисә тапҡыр шулай ҡабатланым. Исмаһам, бер эт сыҡһасы абалап, ҡайҙалыр юҡ булды ла ҡуйҙы улар.

Таңһылыу һеңлемә лә бер кәңәшем бар. Юлда, мөғайын, кәзә баҡырған, бесәй мыяулаған көйҙәрҙе (хәҙерге эстрада йырҙарының күбеһенә мин шундай баһа бирәм) тыңлап йөрөйһөгөҙҙөр. Алыгыҙ үҙегеҙ менән бүре тауышы яҙылған дискты. Аттар әлеге Буҙарған йә Бетерә тугайында юл бирмәһәләр, бүре тауышын тулы көсөнә ҡысҡыртып ебәрегеҙ. Ни булыр икән? Өйөр айғыры машинаңа ябыш да килмәҫ! Юлда йөрөүселәргә уңыштар теләйем!

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
**Баймаҡ районы II Этҡол ауылы.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Икенсе бер гәзит уҡыусы, Әбйәлил районынан Р. Моғаттаров иһә Т. Баһауетдинованың мәҡәләһендәге фекерҙе дауам итеп, былай ти: "Аттар йәки эре мөгөҙлө башҡа малдар юлыма арҡыры сығып торһа, мин был хәлде Хоҙайҙың миңә бүләге, игтибары итеп ҡабул итәм һәм оло шатлыҡ тойғоһо кисерәм. Ни өсөн тиһегеҙме? Сөнки ул хайуандарҙы ла Хоҙай бар иткән һәм әгәр ҙә Ул минең юлыма малҡайҙарҙы сығарып, машинамдың тиҙлеген кәметергә йә туҡталып ҡалырға мәжбүр итә икән, миңә артабанғы юлымда йыйраҡ барырға һәм һаҡ булырға кәрәклекте, алда ниндәйҙер хәүефле хәл-күренеш-ваҡиға көтөп тороу ихтималлығын иҫкәртә. Быны аңларға һәм Бойороусының фарманын үтәргә генә кәрәк, йәғни юлыңда мал осрағандан һуң иғтибарлыраҡ булырға, йыйраҡ барырға кәрәк..."**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Хөкүмәтендә вице-премьер Лилиә Ғүмәрова Башҡортостанда йәшәгән, биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән 60 әсәгә "Әсәлек даны" миҙалдары тапшырҙы. Күп балалы әсәләргә наградалар биреү тантанаһы 102-се тапҡыр үткәрелде. Вице-премьер билдәләүенсә, республикала әсәләргә матди һәм әхлаҡи ярҙам күрһәтеү, ғаилә институтын нығытыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәр ҙә ҡулланыла. Бөгөнгө көндә 34 меңгә яҡын ғаиләгә социаль ярҙам саралары күрһәтелә. 2012 йылда ғына пособиеларҙың дөйөм суммаһы ике миллиард һумдан ашыу тәшкил иткән.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Григорий Курановты республиканың Рәсәй Президенты янындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле - БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары итеп тәғәйенләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Григорий Владимирович Куранов 1959 йылдың 1 ғинуарында Көнсығыш Ҡаҙағстан өлкәһенең Лениногорск ҡалаһында тыуған. Салауат ҡалаһының 6-сы мәктәбен тамамлай. 1976-1978 йылдарҙа "Салауатбыяла" етештереү берекмәһендә эшләй. 1984 йылда Башҡорт дәүләт медицина институтын тамамлай. 2000 йылдан Пермдә эшләй. 2012 йылдың июленән Пермь крайы губернаторы хакимиәте етәксеһе була.

✓Башҡортостанда йәштәр өсөн "Һин - эшҡыуар" федераль программаһы старт ала. Республикала үҙ эштәрен булдырырға йәки үҫтерергә теләгән йәштәр программала ҡатнашыу өсөн заявкалар бирә башлаған да инде. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, проект Рәсәйҙең 40-тан ашыу төбәгендә тормошҡа ашырыла. Бөгөнгө көндә унда меңгә яҡын йәш кеше ҡатнаша һәм биш мендән ашыу кеше үҙенең бизнесын асҡан. Программала йәшәү урыны буйынса Башҡортостанда теркәлгән, үҙ эшен асырға теләгән, шулай уҡ әлеге ваҡытта эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән һәм бизнесын үҫтерергә теләгән 14-30 йәштәрҙәге кешеләр ҡатнаша ала. "Һин - эшҡыуар" тураһында тулыраҡ мәғлүмәт алыу һәм унда ҡатнашыуға заявка биреү өсөн Начни.Сейчас.рф сайтына инергә була.

✓30 ғинуар "Салауат Юлаев" үҙ боҙонда Омскиҙың "Авангард"ы менән көс һынашты һәм уларҙы 6:1 иҫәбенә еңде. Антон Слепышев, Сергей Зиновьев, Штефан Ружичка, Алексей Кайгородовтар ҡунаҡтар ҡапҡаһына - берәр, ә Мирослав Блатяк иһә ике гол индереүгә өлгәште. Был еңеү юлаевсыларға плейофф уйындарына юл асты.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Шулай ҙа йылдың иң мөһим йомғағы итеп демографияның ыңғай үҫешен билдәләү зарур. 2012 йылдың 11 айында Өфөлә 14949 бала тыуып, тәбиғи үҫеш 3538 кеше тәшкил иткән.*



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЫҢҒАЙ ҮҪЕШ...

## өмөт уята

**2012 йыл йомғаҡтары буйынса Өфө Рәсәйҙең халҡы миллионлы булған ҡалалары араһында демография күрһәткестәре, сәнәғәт етештереүе күләме һәм индексы, сальдо (ҡалдыҡ) финанс һөҙөмтәһе (бюджет дефицитһыҙ үтәлгән), уртаса айлыҡ эш хаҡы күләме һәм ваҡлап һатыу әйләнеше буйынса лидерҙар рәтендә килә. Был хаҡта матбуғат саралары вәкилдәренә баш ҡала округы хакимиәте башлығының иҡтисад мәсьәләләре буйынса урынбаҫары Альбина Йосопова матбуғат конференцияһында белдерҙе.**

Ҡала иҡтисадының төп тармағын сәнәғәт алып тора һәм йылды ул 103,6 процент индексы менән тамамлаған. Бында шуны ла әйтеп китеү мөһим - нефть сеймалын эшкәртеү күләме, үтә күренмәле нефть продукталарын етештереү буйынса Өфө илдең нефть эшкәртеүсе үҙәктәре араһында лидерлығын һаҡлай.

2015 йылда баш ҡала ШОС һәм БРИКС саммиттарын үткәреүгә әҙерлек баш ҡаланың инфраструктураһын үҫтереүгә һәм яңы инвестициялар йәлеп итеүгә этәргес булды. Быйтыр төп капиталға инвестициялар күләме 90 млрд һум самаһы тәшкил иткән, тип күҙаллана. Өфө, республика кеүек үк, инвесторҙар өсөн ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыусы ҡала булып тора һәм быны рейтинг агентлыҡтарының баһалары ла раҫлай. Баш ҡала тәҙәләш эштәренең киңәйеүе хеҙмәт баҙарындағы күрһәткестәрҙе кәметеүгә лә йоғонто яһай. 2012 йылда мәшғүллек үҙәктәрендә иҫәптә тороусыларҙың эшһеҙ статусында булыу ваҡыты - 4,7 ай, йыл башынан алып ҡарағанда вакантлы урындар һаны 1,4 тапҡырға артып, 11464 урын тәшкил иткән.

Баш ҡаланы үҫтереү стратегияһының төп өҫтөнлөктәренең береһе булып халыҡтың уңайлы йәшәү шарттарын тәьмин итеү тора. Был йүнәлештә граждандарҙы авария хәлендәге йорттарҙан күсереү эше даими алып барыла. Программа буйынса иҫәптә торған 6217 кешенең 5923-ө яңы торлаҡҡа күсерелгән дә инде. Торлаҡ-коммуналь хужалығын реформалауға булышлыҡ итеү фонды ярҙамында күп фатирлы йорттарҙы ремонтлау дауам итә. Шулай уҡ коммуналь хужалыҡ өлкәһендә ҡала территорияһын һәм юлдаш-ҡасабаларын төҙөкләндереү, ҡаланың тышҡы йөҙөн матурлау буйынса ла эштәр алып барылған. Хеҙмәтләндереү өлкәһенә килгәндә (халыҡты эсәр һыу, йылылыҡ, зәңгәр яғыулыҡ, пассажирҙар ташыусы транспорт менән тәьмин итеү), дөйөм алғанда 10,7 млрд һумлыҡ хеҙмәт күрһәтелгән.

Ләкин юҡҡа ғына, икмәк булһа - йыр ҙа була, тимәйҙәр, шуға ҡулланыу баҙарындағы хәл-торош та ҙур әһәмиәткә эйә. Быйтыр ул тотороҡло булған, халыҡты төп туҡланыу продукттары менән тәьмин итеүҙә өҙөклөктәр күҙәтелмәгән. Шулай уҡ баш ҡала августан алып декабргә тиклем 294 ауыл хужалығы йәрминкәһе уҙғарылыуы ла сифатлы һәм сағыштырмаса арзан продукция запасы туплап ҡалыуҙа ҙур ролен уйнаған.

Шулай ҙа йылдың иң мөһим йомғағы итеп демографияның ыңғай үҫешен билдәләү зарур. 2012 йылдың 11 айында Өфөлә 14949 бала тыуып, тәбиғи үҫеш 3538 кеше тәшкил иткән.

Әйткәндәй, Альбина Сәғит ҡыҙы иҫкәртеүенсә, был йомғаҡтар әлегә бары тик яҡынса һандар ғына. Ләкин һуңғы һөҙөмтә лә дөйөм күрһәткестәргә артыҡ үҙгәрештәр индермәйәсәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ЯҢЫ ЗАКОН*

**2013 йылдың 1 сентябренән "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы яңы федераль закон үҙ көсөнә инәсәк. Өс йыл әҙерләнгән был проект һуңғы йылдарҙа тәҡдим ителгән бар закондар араһында оҙайлы ҡыҙыу бәхәстәр һәм төрлө фекерҙәр тыуҙырыуы менән "Полиция тураһында"ғы законды ла уҙып китте, ахыры. Һәр яңылыҡтың, бигерәк тә мәғариф өлкәһенә ҡағылғанының, халыҡта ҡурҡыу тыуҙырыуы һәм төрлө имеш-мимештәргә юл асыуы ғәҙәти күренеш, әлбиттә. Нисек кенә булмаһын, был закондың бөгөн балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, юғары белем биреү йорттарында тәрбиәләнгән һәм белем алған 880 мең кешегә генә түгел, беҙҙең һәр беребеҙгә мөнәсәбәте бар. Шуға ла яңы законға аҙ ғына асыҡлыҡ индереп ҡарайыҡ, булмаһа.**

# МӘҒАРИФ ӨЛКӘҺЕ...



## тағы ла үҙгәрештәр алдында

"Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы закон - белем алыу тәрбиәрен, кимәлен, формаһын, шулай уҡ белем алыусыларҙың талаптарын, ҡыҙыҡһыныуҙарын иҫәпкә алып, белем биреү өлкәһендә йәмәғәтселек мөнәсәбәттәрен көйләүсе берҙәм комплекслы хоҡуҡи акт ул. Яңы закон 20 бүлектә һәм 170 статьяны (сағыштырыу өсөн: алдағы закон 6 бүлек һәм 58 статьянан тора ине) үҙ эсенә ала һәм "Мәғариф тураһында"ғы (1992 й.) һәм "Юғары һәм вуздан һуңғы профессиональ белем тураһында"ғы (1996 й.) закондарҙы ла алыштырасаҡ. Шуға ла унда белем биреү системаһының балалар баҡсаһынан алып вуздан һуңғы осорға тиклемгә кимәле анығ сағылыш тапҡан. РФ Дәүләт Думаһының Мәғариф буйынса комитеты ағзалары фекеренсә, документ һуңғы егерме йыл эсендә тупланған ыңғай тәжрибәне иҫәпкә алып төҙөлгән. Башлыса бында һүҙ Берҙәм дәүләт имтиханы системаһы тураһында бара, йәнәһе, ул әле үҫеш стадияһында ғына булһа ла, үҙенең һөҙөмтәлелеген күрһәтеп өлгөргән. Бынан тыш, документ Федераль белем биреү стандарттарын һәм белем биреү программаларының яңы системаһын индереүҙе нығыта. Тулы дөйөм белем биреү һәм һөнәри программалар буйынса шулай уҡ дәүләт стандарттары билдәләнә.

Төү ҡарашҡа, Закон бер ниндәй хоҡуҡтарҙы боҙмай кеүек. 1992 йылдағы закондағы кеүек, яңы документта белем биреүҙең түләүһеҙ булыуы гарантиялана, әммә ул Федераль белем биреү стандарттары сиктәренән сыҡмаҫҡа тейеш. Сыға икән, закон буйынса түләүле хеҙмәт рөхсәт ителә, тимәк, белем биреү өләшләтә генә булып килеп сыға. Федераль белем биреү стандарттарына ярашлы, дәүләт рус телендә белем алыу хоҡуғы яҡлана, Федерацияның башҡа халыҡтары телдәрен өйрәнеү тәртибе урындағы закондарға таянып хәл ителәсәк. Тик әлеге лә баяғы Федераль стандарттарҙың республикаларҙың дәүләт телдәрен яҡламауы һөҙөмтәһендә, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеү тағы ла ҡаршылыҡтарға осраясағы көн кеүек асыҡ. БР Мәғариф министры Әлфис Ғаязов әйтеүенсә, беҙҙең федераль кимәлдә ҡабул ителгән закон-ды үтәмәйенсә әмәлебеҙ юҡ, юғиһә, урындағы мәғариф талаптарға яуап бирмәй тип табылыр ине. Шуға ла дәүләт һәм туған телдәр Мәғариф министрлығының ҡурсыуына мохтаж булып ҡаласаҡ әле.

Яңы закон "белем биреү учреждениеһы" тигән төшөнсәне лә юҡҡа сығара. Хәҙер барыһы ла - мәктәптәр ҙә, вуздар һәм балалар баҡсалары ла "белем биреү ойошмаһы" тип аталасаҡ. Әйткәндәй, балалар баҡсалары белем биреү системаһының бер баҫҡысына әүерелә. Йәғни, унда хәҙер балалар белем дә аласаҡ. Законда шулай уҡ мәктәптәрҙең бер тибы ла билдәләнмәй - йәнәһе, йән башына ҡарап финансланған ҙур мәктәп теләгән белем биреү траекторияһын һайлай ала. Гимназия, лицей, махсус мәктәптәр хәҙер ябай мәктәп тип кенә аталасаҡ, теоретик яҡтан улар үҙҙәренең программаларын һаҡлап ҡала аласаҡ, әммә бының өсөн уларға бер кем дә аҡса бирмәйәсәге көн кеүек асыҡ. Бында тағы ла милли гимназия һәм лицейҙарға ауырлыҡ төшәсәген бер аҙ төҫмөрләргә була. Ә ауыл ерендә урынлашҡан мәктәптәрҙә хәҙер ауыл халҡының ризалығынан тыш яба алмаясаҡтар. Шулай уҡ субъекттарға ауыл уҡытыусыларына торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрҙе түләү буйынса льготалар билдәләү хоҡуғы рөхсәт ителгән.

Башланғыс һәм урта һөнәри белем биреү өлкәһе лә үҙгәрештәргә дусар ителә. Башланғыс һөнәри белем биреүсе училищелар ябыласаҡ, уларҙың бер өлөшө урта махсус учреждениеларға ҡушыласаҡ. Хәҙер урта һөнәри белем биреү сиктәрендә ике программа - квалификациялы эшселәр (хеҙмәткәрҙәр) һәм урта звено белгестәрен әҙерләү тормошҡа ашырыласаҡ. Уҡыу йорттарына ҡабул итеү эш биреүселәрҙең ғаризаһына таянып башҡарыласаҡ һәм улар аҙаҡтан йәш белгесте эшкә аласаҡ. Юғары белем биреү өлкәһендә лә үҙгәрештәр байтаҡ ҡына.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Өфөлә уҡытыусыларҙың традицион конкурстары башланды. "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2013" конкурсында 31 педагог ҡатнаша, уларҙың һигеҙе - рус теле һәм әҙәбиәте, бишеһе - башланғыс кластар, өсөһө - инглиз теле, дүртеһе - татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, география, биология, тарих, математика уҡытыусылары - икешәр, берәр уҡытыусы рәсем, музыка, физкультура фәненән уҡыта. "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2013" конкурсында 15 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы көс һынашасаҡ. Был ике конкурс та йылдан-йыл популярлыҡ яулай бара. 16 йыл эсендә уларҙа ике меңдән ашыу уҡытыусы ҡатнашҡан, 50 уҡытыусы еңеүсе исеменә лайыҡ булған. Конкурста ҡатнашыусылар һәм унда еңеүселәр ҡала педагогик берләшмәһенең "алтын фонд"ын тәшкил итә. Бәйге 21 февралгә тиклем дауам итә.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Быйтыр Башҡортостан Хөкүмәтенә 9927 яҙма, шул иҫәптән 383 коллектив мөрәжәғәт килгән. Мөрәжәғәттәрҙең күпселеге торлаҡ мәсьәләләренә ҡағыла. Шулай уҡ халыҡты социаль яҡлау, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, хеҙмәт хаҡы мәсьәләләре лә борсой. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫарҙары халыҡты ай һайын ҡабул итә, быйтыр улар 204 кешене ҡабул иткән. Эш графигы Хөкүмәттең ҡабул итеү бүлмәһендә (Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы, 46) эленгән.

✓Бөтә донъя яман шешкә ҡаршы көрәш көнө сиктәрендә 4 февралгә тиклем муниципаль-ара медицина онкология үҙәктәрендә Асыҡ ишектәр көндәре үтәсәк. Белгестәр яман шештәрҙе асыҡлау буйынса скрининг-тикшереүҙәр үткәрәсәк, халыҡ менән ваҡытында медицина тикшереүе үтеү һәм табиптарға мөрәжәғәт итеү тураһында һөйләшеүҙәр ойошторасаҡ. 2 февралдә 9 сәғәттән алып 13-кә тиклем Республика онкология диспансерының 1-се поликлиникаһында табиптар пациенттар өсөн консультациялар үткәрәсәк.

✓11-22 февралдә Өфөнөң Халыҡ мәшғүллеге хеҙмәте Бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм уға ярҙам итеү фонды менән берлектә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге нигеҙҙәре буйынса бушлай курстар ойоштора. Өфөнөң Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә быйтыр бындай курстарҙа 450 кешегә бизнес алып барыу буйынса консультация хеҙмәттәре күрһәтелде. Бушлай курстарға баш ҡаланың Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә яҙылырға була.

✓6 февралдә "Тамыр" телеканалы "Родина" кинотеатры менән берлектә ҡан рагы менән ауырып, ваҡытһыҙ вафат булған Гөлназ Иҫәндәүләтованың ижади эштәренән күргәҙмә ойоштора. Бында Гөлназ Ғәлимуллинаның Бөтә Рәсәй телефестивалендә иң яҡшы тип табылған "Йәшәү тамсыһы" тигән документаль фильмы күрһәтеләсәк. 19 сәғ. башлана.

✓БР Президенты ҡарамағындағы балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһын тапшырыу буйынса комиссия конкурсҡа ҡатнашыусыларҙың исемдәрен иғлан итте. Улар араһында - Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры артисы Рауил Ғәлин (урта һәм өлкән йәштәге мәктәп уҡыусылары өсөн тәғәйенләнгән "Дүртҡүҙ" китабы өсөн) һәм яҙыусы Сафуан Әлибаев бар. Комиссия 2013 йылдың 25 февраленә тиклем премияға дәғүә иткән эштәрҙе тикшереүҙә ҡатнашырға саҡыра. Комиссия адресы: 450101, Өфө ҡ., Туҡай урамы,46, 419-се бүлмә, телефон: 280-80-75.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЯҘМЫШ БҮЛӘГЕ, ТИҘӘР...

## Башҡорт лицейында уҡыуҙы



(Башы 1-се биттә).

**Фәнил НУРИЕВ, Республика башҡорт лицей-интернаты директоры:** Сит ил ғалимдары төрлө тикшеренеүҙәрҙән һуң шундай бер ҡыҙыҡ һығымтаға килгән: белем усағы яҡшы эшләһен, тиһәң, унда уҡытыусы булып ошо белем усағын тамамлағандар эшләргә тейеш икән. Был хәҡиҡәт беҙҙең уҡыу йортонда төп ҡағиҙәләрҙең береһенә әйләнгән. Тағы бер ҡағиҙә: йәш уҡытыусының дипломы мотлаҡ педагогтыҡы булырға тейеш түгел, техник белеме булған кеше лә яҡшы педагог булып китә ала. Техник белемлеләрҙе мәктәпкә ылыҡтырыу еңел эш түгел. Сөнки инженер йә нефтсенеке менән уҡытыусының эш хаҡын сағыштырып булмай. Ошо айырманы күреп тә, уҡытыусы һөнәренә ылыҡҡандар - улар бөтөн булмышы менән педагог, остаз кешеләр. Ғәмүмән, беҙҙең лицейҙа "иң-индәр" булған уҡытыусылар эшләй. Йәш уҡытыусылар араһында башҡорт лицейын тамамлағандар күп. Олимпиадаларҙа еңеү яулаған, уҡыу алдынғылары булған һәм юғары уҡыу йортонда уҡығанда ла юғалып ҡалмаған кешеләрҙе эшкә ҡайтарырға тырышабыҙ. Һөҙөмтәләр күҙ алдында. Балалар уҡытыусы йөҙөндә ошо уҡ мәктәптә белем алған, үҙҙәренә өлгө була алырҙай шәхесте күрәләр. "Олимпиадаларҙа еңгән уҡытыусы үҙе беҙҙе уҡыта!" тигән ғорурлыҡ тыуа уларҙа. Ошонда лицейҙан һуң Мәскәү дәүләт университетында белем алған Камил Әксән улы Хисамов менән Азат Марс улы Абраровтың исемен әйтеп китеү ҙә етә. Бынан тыш, төрлө грандтар яулап, АҠШ-та, Германияла белемен камиллаштырған Илгиз Рәмил улы Шакиров, Әсҡәт Әхмәт улы Зариповты ла миҫал итеп килтерәм. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә лицей халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың, Рәсәйҙең киләсәге буласаҡ егеттәр тәрбиәләгән икән, ошондай уҡытыусыларҙың өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Һандар менән әйткәндә, егерме йыл эсендә лицей уҡыусылары 11 тапҡыр - Халыҡ-ара, 16 тапҡыр - Бөтә Рәсәй, 163 тапҡыр республика кимәлендәге төрлө конкурстарҙа еңеүсе һәм призерҙар булды. Район, ҡала конкурстарын да иҫәпләгәндә, 364 еңеү яуланды. Уҡыусыларҙың 98 проценты мәктәптән һуң юғары уҡыу йортона инһә, шуларҙың 70 проценты техник вуздарҙы һайланы.

Халыҡта, республиканың иң һәләтле уҡыусыларын йыйып алалар ҙа, шулар иҫәбенә ҙур уңыштарға өлгәшәләр, тигән һүҙ ҙә йөрөй ул. Был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ бар, әлбиттә. Ысынлап та, лицейға уҡыусыларҙы "Орбита" тип аталған полиолимпиада һынауҙары аша ҡабул итәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта был уҡыусылар араһында күпселекте ауыл малайҙары тәшкил итә. Белеүегеҙсә, ауылдарҙа заман талаптарына ярашлы белем биреү мөмкинлеге булмаған мәктәптәр күп кенә. Беҙҙең лицей иһә, шул һәләтле балаларға тулыһынса асылырға, ҙур маҡсаттар ҡуйып, ҡыйыу аҙымдар менән алға барырға мөмкинлек бирә.

**Илгиз ШАКИРОВ, Республика башҡорт лицей-интернатының математика уҡытыусыһы, лицейсы:** Биш ай дауамында Президент программаһы буйынса АҠШ-та тәжрибә туплап ҡайттым. Был программаның маҡсаты сит илдәр тәжрибәһен өйрәнеү һәм беҙҙә ҡулланылмаған яҡшы идеяларҙы мәғариф системаһына индереү ине. Был илдә булғанда үҙем өсөн күп яңы нәмәләр астым. Мәҫәлән, Рәсәй мәғариф системаһында уҡыусының дәрестәрҙә ҡатнашлығы ҙур түгел, күберәк уҡытыусы һөйләй. Америка мәктәбендә төркөмдәрҙә шөғөлләнеү киңеҡ тәжрибә бар. Йәғни, балалар бер-берен уҡыта, уҡытыусы иһә бар ошо эште күҙәтеп, тикшереп тора, идеялар әйтә. Балалар белемдәрен дәрестә саҡта уҡ ғәмәлдә ҡуллана һәм ныҡыта. Хәҙер беҙҙең лицейҙа ла төркөмдәр эсендә эшләү, белем алыу эше йәнләндерелә башланы.

Беҙҙең лицей башҡа мәктәптәрҙән айырыла. Тәбиғи фәндәрҙе уҡытыу инглиз телендә генә алып барыла. Уҡытыу процесында CLIL системаһы ҡулланыла. Был система сит телдәрҙе фәндәр аша, фәндәрҙе сит тел аша өйрәнеү, тигәнде аңлата. Башҡортостанда башҡа бындай мәктәпте белмәйем, шуға күрә лә бында күп фәндәрҙән уҡытыусы булып үҙебеҙҙең лицейсылар ғына эшләй ала. Уҡыусыларыбыҙҙың университеттан һуң беҙгә эшкә ҡайтыуы үҙенән-үҙе килеп сыға. Улар лицей яҙмышына битараф түгелдәр, уның өсөн борсолалар. Ғөмүмән, лицейсылар өсөн үҙҙәрен кеше иткән белем усағына ҡарата игтибар бик ҙур. Лицей фонды барлыҡҡа килеүе - шуға асыҡ миҫал. Был шатландыра. Һәр кем үҙенең ҡулынан килгәнсе ярҙам итә.

Мәғариф өлкәһенә яңылыҡтар индерәм тиһәң, эшкә күберәк йәштәрҙе йәлеп итергә кәрәк. Был ололарҙан баш тартырға кәрәк, тигәнде аңлатмай, әлбиттә. Ләкин беҙ үҙгәрештәр тиҙ барған заманда йәшәйбеҙ. Былтыр ҡулланған алымдар киләһе йылда һөҙөмтәһеҙ, актуаль булмауы мөмкин. Йылдан-йыл үҙгәрештәр тиҙлеге арта. Ошо темпта уңышлы эшләйем, тиһәң, бик зирәк, һиҙгер булыу кәрәк. Ун йылдан ниндәй белгестәр кәрәк буласаҡ икәнен бөгөн аныҡ ҡына әйтә алмайбыҙ. Күрәһең, тәү сиратта IT-технологиялар өлкәһендә яҡшы йөҙгән, мәғлүмәтте ҡуллана белгән белгестәргә ихтыяж ҙур буласаҡ. Шуға күрә лә яңы технологиялар менән ҡуллана белгән кешеләрҙең мәктәптә уҡытыусы булып эшләүе - заман талабы. Зирәк, ысынбарлыҡҡа тиҙ яраҡлаша белгән, үҙе уҡытҡан предметты 100 процентҡа белгән уҡытыусылар ғына әлеге көндә һөҙөмтәле эшләй ала. Психолог булмаһаң, балаларҙы аңламаһаң, мәктәптә эшләүе бик ауыр. Уҡыу балаға ҡыйынлыҡ түгел, кинәнес килтерергә тейеш. Бының өсөн уҡыусы менән яҡшы аралашырға һәм уны яҡын күрергә, уға дуҫ һәм иптәш булырға кәрәк.

Бер нисә йылдан лицейыбыҙҙың уҡыу процесын яңы уҡыу йортонда күҙ алдына килтерәм. Лицей тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәреләсәк, тип ышанғы килә. Шулай тип өмөтләнергә нигеҙ бар. Бөгөнгө көндә беҙҙә, ысынлап та, һәләтле йәш уҡытыусылар быуыны үҫеп килә. Әлеге мәлдә беҙҙең лицей командаһы Мәскәүҙә тәҡдим ителгән "Киләсәк мәктәбе" проекты сиктәрендә "Яңы мәктәп" Бөтә Рәсәй конкурсында 600 команданан торған ике һайлау турын үтеп, иң көслө 20 команда исемлегенә инде, финалға сыҡты.

(Дауамы 6-сы биттә).

ИҠТИСАД ХӘЛДӘРЕ

# ЙӘШТӘРЕБЕҘҘӘ...

## ышаныс кәмей

**Иҡтисад торошо теге йәки был илдең үҫешен йәки, киреһенсә, түбән тәгәрәүен күрһәтеүсе, халыҡтың йәшәү кимәлен билдәләүсе фактор. Шуға күрә был хаҡта күп һүҙ йөрөтөлөүенә лә, күҙаллауҙарҙың күп булыуына ла, яңылыҡтарҙың төп хәбәре ошо тирәлә ҡуйыртылыуына ла аптырайһы түгел.**

Төрлө кимәлдәге иҡтисадсыларҙың фәнни ҡарашын, бөгөнгө һәм дә иртәгәге иҡтисадтың хәл-торошо хаҡындағы фекерҙәрен инҡар итеп булмай, ләкин ил иҡтисадына ҡарата халыҡтың фекерен дә белеү зарур. EPSI Research Services халыҡ-ара тикшереүҙәр компанияһы үткәргән һөҙөмтәләргә ярашлы, Рәсәй халҡының ил иҡтисады үҫешенә ҡарата булған ышаныс кимәле түбәнәйгән. Уҙған йылдың һуңғы кварталы менән сағыштырғанда ул был йыл 13,1 процентҡа кәмеп, 29,4 балл тәшкил иткән. Ә дөйөм ҡабул ителгән Европа стандарттарына ярашлы, ҡулланыусыларҙың нулдән 30 балға тиклемге баһаһы халыҡтың иҡтисад үҫешен түбән билдәләүе хаҡында һөйләй. Әйткәндәй, Рәсәйҙә ошондай уҡ хәл 2008 йылдың аҙағында ла күҙәтелгән, йәғни көрсөк алдынан ил халҡы шулай уҡ иҡтисад үҫеше кимәлен түбән баһалаған. Шулай уҡ Латвия, Литва, Эстония, Чехия һәм Испания халҡы ла көрсөк алдынан үҙ иҡтисадына ошондай уҡ ҡараштa булған.

Һорау алыуҙа осраҡлы рәүештә һайланған 18-65 йәшлек 1900 респондент ҡатнашҡан. Улар араһында Рәсәй иҡтисады үҫешен түбән баһалаусылар башлыса 30 йәштән 39 йәшкә тиклемгеләр. Был төркөмдә ышаныусанлыҡ индексы 24,7 процентҡа тиклем түбәнәйгән. Улар аҙыҡ-түлеккә йыш хаҡ артыуынан, эш урындары етмәүенән, етештереүсәнлектең түбәнәйеүенән, коррупцияның сәскә атыуынан, ауыл хужалығының емерелеүенән, эш хаҡының аҙ булыуынан һәм үҙҙәренең матди хәленең насарайыуынан сығып яуаптар биреүен белдергән. Ә 50 йәштән олораҡтар төркөмөндә иһә был һан ни бары 11,9 процент тәшкил итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күренеүенсә, Рәсәй иҡтисады үҫешен кире баһалаусыларҙың күбеһен эшкә һәләтле йәштәр тәшкил итә. Ошо айырыуса хәүефкә һала. Илде үҙ ҡулына алырға тейешле йәштәрҙең күңелендә бындай шик орлоҡтарының бөрөләнеүе, ысынлап та, яҡшы һөҙөмтәләргә килтермәскә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта оло быуын кешеләре араһында иҡтисад, тимәк, дөйөм ил үҫешенең ыңғай булыуына ышаныусыларҙың күплеге бер аҙ тынысландыра. Ни тиһәң дә, йәшлек ҡыҙыулығы менән әйтелгән фекер тәжрибә һәм аҡыл тәрәнлегенә етмәй.**

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

### Тоҙло кәбеҫтә һыуы



❖ Бауыр ауыртҡанды яртышар стакан тоҙло кәбеҫтә һәм помидор һыуын бергә ҡушып, ашарҙан алда эсергә кәрәк. Дауаланыу - ике ай.

❖ 1 стакан тоҙло кәбеҫтә һыуын көнөнә бер тапҡыр эсеү ҙә шифалы - ундағы витаминдар ҡан тамырҙарына, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына яҡшы тәьҫир итә, диабетҡа, төрлө шештәргә ҡаршы тороу үҙенсәлеген ныҡыта.

### Меңъяпраҡ

Гастрит, ашҡаҙан сей яраһы, ҡанды нормаллаштыреу өсөн 2 ҡалаҡ меңъяпраҡты 200 мл ҡайнар һыуға һалып, 15-20 минут төнәтергә һәм йылы килеш 0,5 стаканлап, көнөнә 2-3 мәртәбә эсергә.

Был үлән бала имеҙеүсе әсәнең һөтөн дә арттыра.

### Гөлйемеш

Организмдың төрлө ағзаларындағы таштарҙы иретеү өсөн ваҡлап туралған гөлйемеш тамырын ҡулланығыҙ. 1 стакан һыуға 2 ҡалаҡ гөлйемеш тамыры һалып, 15 минут ҡайнатырға, һыуынғас, һөҙөргә. Бер аҙна дауамында көнөнә 3 мәртәбә 1-әр стакан эсергә.

### Эс ҡатыу

❖ Алоэ япрағын киҫеп алып, 2 аҙна һыуытҡыста тоторға һәм һутын һығып алырға, 1:1 нисбәтендә бал менән ҡушырға. Шуны иртәнсәк ас ҡарынға 1 ҡалаҡ, ә төнгә һәтҡә ҡушып эсергә. Ике көн үткәс, дозаһын кәметергә лә була.

❖ 80-100 грамм балды һыуыҡ һыуҙа йәки алма һутында иретеп, 3 өлөшкә бүлергә һәм ашар алдынан эсергә.

❖ Шулай уҡ крыжовник, ҡыяр, виноград, персик, слива, балан, миләш, тоҙло кәбеҫтә, ҡабыҡы менән алма ашау ҙа файҙалы.

❖ Ҡарт кешеләргә ҡауын, сәй бөшмәге, ҡыҙҙырылған бойҙай, йәшел борсаҡ килешә.

### Киҙеүҙән дауа

2 ҡалаҡ киптерелгән һәм ваҡланған андыҙ тамырын ярты литр ҡайнар һыуҙа 10-12 минут ҡайнатырға, һыуынғас, һөҙөргә һәм 2 ҡалаҡ бал ҡушырға. 100 мл күләмендә көнөнә 3-4 мәртәбә ашарҙан 30 минут алда эсергә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Әлеге ваҡытта лицейҙың супербинаһы түгел, ә ябай ғына бинаһы ла ябылған. Бар уҡытыу эштәре лицейҙың емерелергә торған бинаһы эргәһендәге 5-се һөнәрселек училищеһының икенсе ҡатында алып барыла.*

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Егерме икенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Исламда ғаилә. Ғаилә ҡороу тураһында халҡыбыҙҙа мәҡәлдәр бик күп. Сөнки ғаилә ҡороу өсөн иш һайлау бик ҡатмарлы, яуаплы төшөнсә. Ғаилә уңышһыҙ килеп сыға икән, балаларға ауыр. Дүртенсе класс уҡыусыһы был теманы ауырыраҡ ҡабул итер, шулай ҙа ҡайһы бер төшөнсәләрҙе зиһененә һалып, күңеленә һеңдереп ҡуйыу яҙыҡ булмаҫ. Әйтәйек, мөхәббәт тойғоһо менән ғашиҡ булыуҙы бутамау. Ғашиҡ булыу - ул ваҡыт һынауы үтергә тейеш. Ә мөхәббәт тойғоһо ғашиҡ булыуҙан нык айырыла: ҡапыл тоҡанып, дөрләп ҡабына торған төшөнсә түгел. Мөхәббәт ихлас, эскерһеҙ тойғоларҙан, һөйөүҙән, бер-берендә ихтирам итеүҙән, донъяға ҡараштарҙың бер булыуынан һәм башҡа шундай күңел берлегенән туплана торған тойғо ул. Ислам дине бына шул сифаттарға нык иғтибар итә.

## Егерме икенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Ғибәҙәт ҡылыу һәм изге урындар. Дини кешеләр өсөн изге урындарға барып ғибәҙәт ҡылыу оло мәртәбә һанала. Исламда хатта биш шарттың береһе - хажға барыу һанала. Уҡыусыларға иҫтә ҡалдырыу өсөн төп төшөнсәләрҙе, үткән дәрестәрҙәге кеүек үк, дәфтәргә яҙып ҡуйыу маҡсатҡа ярашлы булыр.

Христианлыҡ. Ғибәҙәт ҡылыу урыны - Ғайса бәйғәмбәрҙең тормошо һәм үлеме менән бәйле урындар. Иң мөһиме - ул ерләнгән урын - Йәрүсәлим ҡалаһындағы Господень Табуты.

Ислам. Мәккә.Ҡәғбә тирәһендә төҙөлгән мәсет. Икенсе урын - Мөхәммәт бәйғәмбәр ерләнгән урын. Мәҙинә ҡалаһы, Бәйғәмбәр мәсете.

Йәһүд дине. Изге урын - Йәрүсәлим ҡалаһы. Йәрүсәлим храмы. Ундағы Илау Стенаһы.

Буддизм. Ғибәҙәт ҡылыу мотлаҡ түгел. Теләгәндәр өсөн ғибәҙәт ҡылыу урыны - Һиндостан. Бодхая. Буддаға асылыш килгән урын.

## Егерме икенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Намыҫ һәм кешелек дәрәжәһе. Дини тәғлимәттәрҙә был төшөнсә иман тип алына. Иманлы, иманһыҙ, үҙ иманыңа хыянат, иманың алдында яуаплылыҡ һәм башҡалар. "Урал батыр" эпосында һәм башҡорт халҡының башҡа ижад төрҙәрендә намыҫлы кеше булыу Яҡшы кеше булыу йәки Кеше булыу тип алына.

Барығыҙға шуны әйтәм:
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ;
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!

Нимә ул яҡшылыҡ һәм нимә ул яманлыҡ? Был һорауға бик оҙон да йәки бик ҡыҫҡа ла яуап биреп була. Әле инде уҡыусылар хәтерендә ҡалдырһын өсөн дәфтәрҙәренә иң ҡыҫҡа яуапты яҙып ҡуйһындар. Яҡшылыҡ - ул үҙең һәм иң-иң яҡындарың өсөн ҡылыр ғәмәлде башҡалар өсөн дә эшләү, яманлыҡ - үҙеңә һәм иң-иң яҡындарыңа бер ваҡытта ла ҡылмаҫ ғәмәлде башҡаларға ҡарата эшләү.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЯҘМЫШ БҮЛӘГЕ, ТИҘӘР...

## Башҡорт лицейында уҡыуҙы

**(Башы 1, 5-се биттәрҙә).**

**Илсур СӨЛӘЙМӘНОВ, лицейҙың "Үҫеш" фонды директоры, лицейсы:** Үткән йыл аҙағында лицейҙың 20 йыллыҡ юбилейын үткәреү сығымдарын лицей персоналы һәм сығарылыш уҡыусылары тулыһынса үҙ өҫтөнә алды. Берәүҙәр финанс яҡтан ярҙам итте, икенселәр ойоштороу эшендә әүҙем ҡатнашты. Хатта Америка Ҡушма Штаттарында эшләп йөрөгән элекке уҡыусыбыҙ ҙа дөйөм эштән ситтә тороп ҡалманы, логотип, дизайн эшләп ебәрҙе. Юбилей кисәһенән һуң әле быға тиклем Фонд эшендә ҡатнашмаған лицейсылар ярҙам, теләктәшлек күрһәтергә әҙер булыуҙарын белдерҙе.

Нимә тарта һуң лицейсыларҙы үҙ туған уҡыу йорто өсөн бындай фиҙәкәрлеккә? Беҙгә егеттәр 6-сы синыфтан һуң уҡырға инә. Тап ошо ваҡытта кешенең характеры, донъяға ҡарашы формалаша. Ғаиләләге шикелле татыулыҡ мөхитендә үҫкән малайҙарҙа берҙәмлек нығына. Бында алған тәрбиә, дуҫлыҡ һәм берҙәмлек тойғоһо уларҙы лицей яҙмышына битараф булмаҫҡа өйрәтә. Лицейҙың Башҡортостан мәғарифы өсөн әһәмиәтен аңлаған, уның уҡытыу-тәрбиә эшендәге уңыштарын күрә белгән лицейсылар мәктәпте тамамлағас та уның тормошонда әүҙем ҡатнашырға атлығып тора. Сөнки Республика башҡорт лицей-интернатының ысын ҡиммәтен лицейсыларҙан да яҡшыраҡ бер кем дә аңлай алмай.

Фондтың барлыҡҡа килеүе - элекке лицейсыларҙың рәхмәтле булыуы емеше лә инде. Тәүге сығарылыштар уҡыусылары, лицей үҫһен, уҡыу эше тоткарлыҡһыҙ барһын өсөн уға ярҙам итергә кәрәк, тигән инициатива менән сыҡты. Лицей етәкселеге һәм балаларҙың ата-әсәләре тарафынан идея хуплау һәм теләктәшлек тапты. Фонд шулай барлыҡҡа килде. Уның әһәмиәте ҙур. Конкурентлыҡ көслө, ә сифатлы белем биреү көн талабы булған осорҙа бюджет бүлгән аҡсаға ғына йәшәп булмай. Яңы технологияларҙы ваҡытында индермәһәң, алдынғы ҡарашлы методологик ҡулланмаларға таянмаһаң, тиҙ арала замандан артта тороп ҡаласаҡһың. Күп мөһим проекттарҙы дәүләт аҡсаһына ғына башҡарып булмай. Шул уҡ ваҡытта был проекттарҙы эшләмәһәң, алдынғылар рәтендә бер ҡасан да булмаясаҡһың. Эшләп килеү осоронда Фонд лицейға күп өлкәлә ярҙам итте. Полиолимпиадаларҙы үткәреү һәм лицейсыларҙы Бөтә Рәсәй олимпиадаһы этаптарына әҙерләү маҡсатында Мәскәүгә ебәреү, уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу өсөн уларҙы Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә уҡытыу, лицейҙы яңы компьютерҙар, оргтехника, проекторҙар, интерактив таҡталар менән йыһазландырыу, ятаҡхана һәм синыфтарҙа ремонт эшләргә ярҙам итеү, төрлө байрам саралары, осрашыуҙар, оҫталыҡ кластары ойоштороу шуларҙың бер өлөшө. Төп ғорурлығыбыҙ - робот техникаһы тормошҡа ашырыу. Республиканың урта белем биреү учреждениелары араһында беренселәрҙән булып ошо проект эшләй башланы. Уҡыусылар ҡыҫҡа ғына ваҡытта Башҡортостан, Рәсәй кимәлендә ҙур уңыштарға өлгәште лә инде. Киләһе йыл донъя кимәленә сығырға ниәттәре бар.

**Айҙар ШӘЙХИСЛАМОВ, лицейсы:** Ошо лицейҙа алған белемем донъяның өс континентында, өс университетында уҡыуыма, әлеге көндә биш телдә иркен аралаша алыуыма нигеҙ булды. Лицейҙа донъяға ҡараштарыбыҙ, характерыбыҙ формалашты. Аныҡ маҡсаттар ҡуйып, уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн эшләргә, йәшәргә өйрәндек. Уҡытыусыларыбыҙ һәм тәрбиәселәребеҙ тыуҙырған мөхит беҙгә ярышып белем алыу мөмкинлеге бирҙе. Күберәк күнегеү ятлау һәм күләмлерәк материалдар үҙләштерер өсөн синыфташтарыбыҙҙан иртәрәк торорға тырыша инек. Лицейҙа алған тәрбиәнең ни тиклем әһәмиәтле, кәрәкле икәнен йылдар үткәс, донъяны күп гиҙгәндән һуң ғына аңланым. Беҙҙе насарлыҡтарҙан ҡурсаларға тырышҡан, ғилемгә мөхәббәт уятҡан, кеше иткән кешеләргә рәхмәтемде еткергем килә.

Мин башҡорт лицейында алған белемде һәр саҡ донъяның иң элиталы һаналған мәктәптәренең береһе - Англияның Итон колледжы менән сағыштырам. Бер нисә быуатлыҡ тарихы булған был колледжда күп билдәле шәхестәр уҡып сыҡҡан. Төркиәлә, Америка Ҡушма Штаттарында уҡығанда донъяның төрлө илдәренән килгән студенттар менән аралашырға тура килде. Бер ҡасан да үҙемдең белем, әҙерлек кимәленә зарланманым. Инглиз телле элиталы колледждар тамамлаған студенттар менән уларҙың туған телдәрендә иркенләп аралаштым. Башҡа фәндәрҙә белеү кимәле лә әңгәмәсәләремдән түбән булманы. Кемдәрҙер сифатлы белем алыу өсөн күпләп аҡса түләһә, мин шундай уҡ белемде туған ҡаламда бушлай алдым. Ҡасандыр ошо лицейға уҡырға инеүемде яҙмышымдың иң ҡиммәтле бүләктәренең береһе, тип һанайым.

**Азат МӘХМҮТОВ, Өфө дәүләт авиация-техник университетының 4-се курс студенты, лицейсы:** Республика башҡорт лицей-интернатын 2009 йылда тамамланым. Мәктәптә уҡыған саҡта уҡ студент булып киттем. Төрлө олимпиадаларҙа еңеүем имтиханһыҙ юғары уҡыу йортона инергә мөмкинлек бирҙе.

Белемем төплө булғас, буш ваҡыттарымда шәхси репетитор булып эшләнем. Уҡыусыларыма төплө белем бирҙем, тип иҫәпләйем. Уларҙың уңыштары күҙгә күренерлек, ата-әсәләре лә ҡәнәғәт булды. Лицейҙа алған белемем ҡаланың көслө мәктәптәрендә уҡыған балаларға фәндәрҙе тәрәнерәк төшөндөрөргә булышлыҡ итә.

Бына әле беҙ бинаһы булмаған лицейыбыҙҙың киләсәге өсөн борсолоу кисерәбеҙ. Уның киләсәге, әлбиттә, уҡыусылар, уҡытыусылар, тәрбиәселәрҙән тора. Ныҡышмалы, фиҙәкәр хеҙмәт кенә уны юғары кимәлдә һаҡлап ҡаласаҡ. Беҙ, РБЛИ-ла белем алған уҡыусылар ҙа, был эштән ситтә тороп ҡала алмайбыҙ. Лицейҙың киләсәге ниндәй буласағын көтөп ятырға түгел, ә шул киләсәге яҡты, яңы уңыштарға, ҡаҙаныштарға бай булһын өсөн эшләргә, тырышырға бурыслыбыҙ. Лицейҙа белем алған һәм әле уҡып йөрөгән уҡыусылар - һәммәбеҙ ҙә үҙебеҙгә: "Мин лицей өсөн нимә эшләй алам?" - тигән һорау бирергә тейешбеҙ. Һәр кем ҡулынан килгәнсә был эшкә үҙ өлөшөн индерәсәк, тип өмөтләнәм. Үҙемә килгәндә, әлеге ваҡытта мәктәпте финанслау буйынса бер проектта ҡатнашам.

**Руслан ӘБДРӘХИМОВ, РБЛИ-ның "Лицей йәштәре берлеге" президенты:** Үҙем Ырымбур өлкәһенән, 10-сы синыфта уҡыйым. "Лицей йәштәре берлеге"нең президенты итеп уҡыу йылы башында һайландым. Лицейҙа ошондай үҙидаралыҡ системаһы булдырылыуы беҙҙе дисциплинаға өйрәтә, яуаплылыҡ тойғоһон арттыра, лидерлыҡ сифаттары тәрбиәләй. Ошо һәм башҡа күп миҫалдар аша лицейҙа уҡыған балалар үҫешһен өсөн бар мөмкинлектәр тыуҙырылғанын күрергә була.

Минең үҙемдә мәҙәни-нәфис эшмәкәрлек ылыҡтыра. Лицейҙың "Башҡорттар.ру" отҡорҙар һәм тапҡырҙар командаһында сығыш яһайым, Башҡортостан юлдаш телеканалында "Байтус" тапшырыуын алып барам. Шулай уҡ "Телевизион оҫталыҡты үҫтереү" курстарында шөғөлләнәм. Киләсәктә Мәскәү ҡалаһының юғары уҡыу йорттарының береһенә уҡырға инеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙым. Әлбиттә, килеп сыҡһа, Мәскәү дәүләт Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтына уҡырға инеү теләге ҙур.

Миңә лицейҙа нык оҡшағаны - лицеистар араһындағы туғанлыҡ тойғоһоноң көслө булыуы. Лицейҙы тамамлағандар ҡайҙа ғына осрашһа ла бер-береһе менән бер туғандай күреп аралаша. Каникулға ҡайтҡан саҡта синыфташтарыбыҙҙы ике-өс көндә һағынып өлгөрәбеҙ. Сығарылыш уҡыусылары өлгөһөнән күреүебеҙсә, был татыулыҡ, туғанлыҡ лицеистарҙы ун йылдан, егерме йылдан һуң да ташламай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәбәрҙар булмағандар, моғайын, ошондай шәп уҡыусылар тәрбиәләгән лицейҙы өр-яңы лабораториялар менән йыһазландырылған, замандың һуңғы талаптарына яуап биргән супербинала урынлашҡан итеп күҙ алдына килтергәндер. Ысынында иһә, әлеге ваҡытта лицейҙың супербинаһы түгел, ә ябай ғына бинаһы ла ябылған. Бар уҡытыу эштәре лицейҙың емерелергә торған бинаһы эргәһендәге 5-се һөнәрселек училищеһының икенсе ҡатында алып барыла. Шуға ҡарамаҫтан, лицейҙа уҡыу-уҡытыу дауам итә. Яңы бина төҙөү тураһындағы ниәт әле бары тик һөйләшеүҙәр кимәлендә генә.**

**Милләттең юғары күтәрелеүе йәки ҡолауы йәштәрҙең рухына, аңына, уларға ниндәй тәрбиә һәм белем бирелеүенә бәйле. Шуға ла, йәштәргә яҡшы тәрбиә биргән милләттәр үҙҙәренең киләсәген гарантиялай алһа, тәрбиә эшен һанға һуҡмаған милләттәр үҙҙәрен үлемгә дусар итә. Бер аҡыл эйәһе, ниндәй ҙә булһа милләттең киләсәген күргегеҙ килһә, уның йәштәренә ҡарағыҙ һәм һеҙ күргән күренеш хаҡлыҡҡа тап киләсәк, тигән. Лицейҙа ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңлайҙар. Белем усағының бар ҡыйынлыҡтарға ҡарамайынса дәррәү эшләүе, бер мәлгә лә туҡтамай алға барыуы, заман талаптарына яуап бирергә ынтылыуы ошоно раҫлай ҙа инде.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

✓ *Мағул-татуларға Урал һәм Булыға алды арҙары ла ҡушылып, Татуға ар өҫтәлеп, урыҫ өсөн "тат+ар" булып киткән. Был "тат-+ар" яңы этносҡа исем итеп урыҫ кенәзлектәре йылъяҙмалары тарафынан бирелгән.*

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**Һуңғы йылдарҙа тарихыбыҙҙы тергеҙеү яҡшы уҡ йүнәлеш ала кеүек. Ниңәлер бығаса тарихсылар, фольклорсылар, археологтар тарафынан урындағы ҡомартҡылар аҙ өйрәнелде. Әлегә тиклем оло тарихты тәшкил иткән ваҡ ваҡиғаларға иғтибар бөтөнләй булманы. Ә бит кешелек донъяһы үҙенең меңәрләгән йылғы йәшәү осоронда төрлө-төрлө ижтимағи-сәйәси осор үткәргән. Һәр осорҙоң - үҙ сәйәсәте, уға ярашлы иҡтисады, тормош ағышы. Барлыҡ халыҡтар ҙа, ниндәй генә телдә һөйләшеүҙәренә һәм ниндәй генә ҡитғала йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, таш быуатта ла һәм хәҙерге заманда ла, бер-береһенә һырығып, ойошоп донъя көтә. Быны раҫлаусы миҫалдар - ғаилә, ара, йорт, аймаҡ, ауыл, ҡала. Был берекмәләр иҡтисади һәм сәйәси үҫеш алып, ҡәбилә, ырыу берекмәләрен тыуҙырып, артабанғы үҫештәрендә ханлыҡ-кенәзлек һәм дәүләттәр барлыҡҡа килтергән. Билдәле, һәр ханлыҡтың, кенәзлектең үҙ-ара һәм күршеләре менән дә аралашыу өсөн үҙ һуҡмаҡтары, юлдары булған. Шундай юлдар тураһында булыр һүҙем.**



# ШӘРЕҠТӘН - ҒӘРЕБКӘСӘ,

## йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы

### Ифрат күп төрлө улар

Беҙҙең башҡорт йәшәйешендә һәм телендә юлдар үҙҙәренең бүленеше, атамаһы буйынса ифрат та күп төрлө. Уларҙы шартлы рәүештә түбәндәгеләргә бүлеп булыр ине.

**1. Ғәмәл юлы.** Нимәнелер башҡарыу юлы. Ҡайҙалыр барыу юлы. Ара юлы. Дауалау юлы. Мөнәсәбәт булдырыу юлы (дипломатия). Бәйләнеш юлы. Аҡса алыу, биреү, эшләү юлы. Ебәк юл. Көрәшеү юлы (физик көрәш, сәйәси көрәш, иҡтисади көрәш).

**2. Тәбиғәт юлы.** Ҡаты юл. Машина юлы. Асфальт юл. Һанама юл. Йомро юл. Һуҡмаҡ. Ураҡ. Ҡуян урағы. Йәнлек юлы. Ҡош юлы. Хайуан юлы, эҙе. Балыҡ юлы (үрләй, түбәнләй, йөрөй). Һыу юлы. Тау юлы.

**3. Сифат юлы.** Яҡшы юл. Насар юл. Тумарланып ятҡан юл. Тайғаҡ юл. Яҡты юл. Ҡараңғы юл.

**4. Эпик юл, йыһан юлы.** Тәңре юлы (ҡояш әйләнеше). Ай юлы (йәш ҡыҙҙарҙың, килендәрҙең, ҡатындарҙың һыу юлы, йәшлек юлы). Йондоҙ юлы (комета). Ҡош юлы (Млечный путь). Ҡәғбә юлы (хаж юлы). Ҡуңыр Буға юлы (боронғо ҡәбиләләр бәйләнеше юлы). Әүлиә юлы (яңы тәғлимәт юлы).

Туған телен белгән һәр бер кеше быларҙың барыһының да мәғәнәһен һәм ҡулланыу урынын беләлер. Атамалар исеме йә иҫкергәнлектән, йә ике мәғәнә аңлатҡанлыҡтан, уларҙың ҡайһы береһенә аныҡлыҡ индереп китеү дөрөҫ булыр. Ғәмәллектә барыһы ла аңлашыла кеүек. Ә тәбиғәт юлдарының ҡайһы бер атамаларына аңлатма биреү зарур.

**Һанама юл.** Урман эсендә, түбәлектәр араһында, йә яланда берҙән-бер арба йә сана юлы.

**Йомро юл.** Йәйәүлеләр йә һыбай йөрөй торған юл. Ул ғәҙәттә тығыҙ ерҙәр аша бара. Ҡуйы урманлыҡ, тау-таш, һаҙ яғаһы араһында, батҡыл урындарҙа тик йомро юл булған һәм әле лә бар.

**Ураҡ.** Һис ситкә сыҡмай торған юл өлөшө. Ураҡ юл, ҡуян урағы. Ул, ғәҙәттә, оҙон булмай.

**Йәнлек юлы.** Әммә юлды эҙ менән бутарға ярамай. Һәр йәнлектең (бүре, төлкө, кәзә, һеләүһен, айыу, бурһыҡ) үҙ төйәге, һәр саҡ бер тирәләрәк ятағы була. Шул ятаҡтан һунар, һыу, үреш еренә, йә дошмандарынан ҡасыу юлы була. Нигеҙҙә, ул ҡитғалар һыҙмаһы ҡанунына буйһона.

Осар ҡоштоң да осор юлы, ҡануны бар. Һыуҙан - һыуға, тибер ерҙән - сүпләр ергә. Әммә ҡоштар күберәк ҡитғалар һыҙмаһы буйлап оса. Был осоштар - көндәлек тормош ғәмәле. **Оло ҡош юлы** - көҙгө миҙгелдә көньяҡҡа осоу өсөн күрһәтмә. Ҡош юлы үҙен ергә бик ҡыҫҡа тулҡындар ебәреп, осор ҡоштарҙың һиҙемләү тойғоһон тирбәтеп билдәләй. Улар шул йоғонтонан ситкә китә алмай. Төндәрен дә, күҙҙәрен йомоп, осалар ҙа осалар.

**Тәңре юлы.** Тәңрене кем нисек аңлайҙыр? Әгәр ҡояш тип аңлаһа, Ҡояш әйләнеше юлы.

Хәҙер инде күктән ергә төшәйек. Ҡитғалар араһындағы һәм Рәсәй кенәзлектәренең һәм һуңғараҡ империяһының юлдарына аңлатма биреү кәрәкмәйҙер. Әммә беҙҙең башҡорт ере аша үткән бик-бик боронғо юл бар. Ул икәү. Ефәк юлы тип атала ул. Икеһененең дә башы - Һиндостан, Ҡытай. Ҡытайҙың төньяҡ-көнбайышынан ул икегә айырыла. Түбәнгеһе уйғырҙар аша Көньяҡ Ҡаҙағстан, Урта Азия аша Фарсы, Ғәрәбстан, Египет яҡтарына юллана. Икенсеһе - мунғалдар һәм уйғырҙар уртаһы менән Төньяҡ Арал ере аша Көньяҡ Уралға, Урал аша үтеп, Башҡортостандың көнбайышында Булығаға (Волгаға) етмәҫ борон икегә айырыла. Береһе көньяҡҡа тартып, Тын (Дон), Ҡобан аша Византияға һәм көньяҡ-көнбайыш Европаға үтә. Көньяҡ Уралдан һуң Булғар иленә барғаны, Иҙел - Булыға аша сығып, тура көнбайыш Европаға үтә. Исеме лә уның Үр юл, йәки бөгөнгө Орел ҡалаһы ерҙәре аша үткән юл. **Урыҫ этимологияһында Орел һүҙенең тамыры юҡ. Ул һүҙ төрки-мағул һүҙе "Үр юл"дан алынған.** Тимәк, түбәнге юл Византияға, ә Үрге юл көнбайыш Европаға барған. Орел ҡалаһының барлыҡҡа килеү тарихын урыҫтар хәҙер: "Имеш, ҡасандыр шул урында ҙур ағас башында орел оялаған. Шуға Орел тип атағандар", - тигән уйҙырма баҫа. Орел да бейектәге, юғарылағы Үрге юл менән осоп йөрөй бит.

### Кемдәр улар монгол-татарҙар?

Бында юлдар темаһынан ситкә китеп, ололар һөйләүенән монгол һүҙенә асыҡлыҡ керетеп китәйек. Ҡалмаҡ-башҡорт яуҙарынан һәр төрлө ер атамалары, легендалар байтаҡ ҡалған. Ҡалмаҡ (ҡалмыҡ) яуы тураһында һүҙ сыҡһа, ололар мунғал ҡалмаҡтары, тип һөйләр ине. Ә ҡаҙаҡтар, ҡараҡалпаҡтар (ҡарағалпаҡ), башҡорттар, ғөмүмән, төрки халыҡтары тураһында "мағул төркиҙәре" тигән атама булды. Тимәк, "төрки халыҡтарының мағул берләшмәһе" тип аңларға кәрәкмәйме икән? Урыҫтар "монголо-татарское иго" тип яҙа. Ә беҙҙең тарихсылар, урыҫтар яҙмаһына эйәреп, "монгол-татар", ҡайһы береһе "мағул-татар" тип яҙа. Был, минеңсә, ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Сыңғыҙхан һәм Батыйҙың мағул төркиҙәре берекмә-дәүләтендә һәм ғәскәрендә тату ҡәбиләһе халҡы күпселекте тәшкил иткән. Урыҫ кенәзлегенә баҫып керер алдынан был мағул-татуларға Урал һәм Булыға алды арҙары ла ҡушылып, Татуға ар өҫтәлеп, урыҫ өсөн "тат+ар" булып киткән. Был "тат-+ар" яңы этносҡа исем итеп урыҫ кенәзлектәре йылъяҙмалары тарафынан бирелгән. Уға тиклем Оло Иҙел буйында татар тигән этнос булмаған. Батый хан Оло Иҙелдә булғарҙарҙы һәм уларҙың ҡалаһы Болғарҙы нигеҙенә тиклем туҙҙырғас, шул тирәләге ар халҡын ҡушып, штрафбат кеүек алдан ҡыуып килтергән. Мағулдар татулар менән көнбайышҡа урыҫ кенәзлектәренә йүнәлә. Чудь, вепс һәм башҡа милләттәрҙе баҫып, кенәзлектәрен ҡороп алған урыҫтар Батый ғәскәренән ҡурҡып, ҡала-нығытмаларына бикләнә.

Был нығытмаларҙы алырға Батый хан, әлбиттә, төп гвардияһы алдынан барған тату һәм ар халҡын ебәрә. Тату-аҙарға башҡа сара ҡалмай. Арттан мунғал гвардияһы. Алда урыҫтар. Шуға ла улар аяуһыҙ һуғышып, урыҫ ҡәлғәләрен берәм-берәм баҫып алған. Урыҫтарҙа татуарҙар яҡшы хәтирә ҡалдырмаған. Урыҫ кенәзлектәре берләшеп көсәйгәс, улар тату, арҙарҙан быуаттар буйы үс алған. Ә Оло Иҙел буйында, татуарға ҡәрҙәш тә булмаған булғарҙар йәшәгән. Улар боронғораҡ заманда Оло Иҙел буйлап өҫкә күтәрелгән хазарҙар тоҡомо булған. Мунғал һүҙе, ғөмүмән, беҙҙең осорҙа, беҙҙең ерҙә һирәк осрай торған һүҙ. Беҙ бала саҡта халыҡ араһында шундай йыр ҙа йөрөй ине:

*Мунғалдарҙың аттары*
*Аҡ ала ла күк ала.*
*Тағы бер йыл һуйыш булһа,*
*Был ырыуҙан кем ҡала?*

Монгол-мунғал тоҡомо аттарында, ысынлап та, аҡ ала, күк ала, туры ала күп. Тимәк, мағул-төркиҙәр, башҡа халыҡ ислам динен алған, ә мунғалдар - бөгөнгө ҡалмыҡтар, буряттар, монголдар һ.б. будда динендә. Мағулдарға төрки һүҙе аҙағыраҡ йәбешкәндер? Бында ла Рәсәй тарихсыларының "ярҙамы" барға оҡшай. Ғөмүмән, батырсылығы еткән ғалим-тарихсыларға ҡатламдар аҫтынан дөрөҫлөктө эҙләү өсөн ялан киң. Бурят, Тыва, Алтай, Уйғыр, Ҡытай, Монгол тарихын, архивтарын аҡтарып эҙләргә ине лә... Мунғал менән мағул һүҙе ҡаҙаҡ менән казак кеүегерәк инде.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттар ҡатмарлы тоҙаҡтарҙан йәнлекте үҙенең ауырлығы менән баҫыусы тәпеләр һәм һуғып иҫәнгерәтеүсе ҡапҡандар (тәпе, атма, һауыт) ҡулланған.

Тәпе йәки ҡамас береһе өҫтөнә икенсеһе урынлаштырылған ике бүкәндән (түмәрҙән) торған. Уның өҫтәгеһе саҡ ҡына күтәрелеп ҡуйыла, бүкән килеп эләккән йәнлекте үҙенең ауырлығы менән баҫыра. Бер үк рәүешле ҡоролма булһа ла, тәпеләрҙең сысҡан аулай торған бәләкәйҙәре лә, айыуға ҡоролған бик ҙурҙары ла була. Тәүге осраҡта тәпе ике таҡтанан тора һәм ҡаптырғыс урынына туң май алына. Икенсе осраҡта тоҙаҡ бүрәнәләрҙән эшләнә һәм ҡаптырғыс рәүешендә үлгән йәки айыу өҙгөләгән мал-тыуар тора.

Айыуға ҡоролған тоҙаҡты урынлаштырғанда ағас түшәмә эшләнә, уның өҫтөнә ҡаптырғыс менән тоташтырылған махсус ҡулайлама ярҙамында өсмөйөш формаһындағы бүрәнә ҡапҡан нығытыла. Түшәмәгә ҡаптырғыс һалына, һәм айыу аҙыҡҡа ҡағылыу менән ҡапҡан айыу өҫтөнә төшә.

Сысҡан аулау тәпеһе Башҡортостанда киң танылыу таба һәм борон уның менән сысҡан ғына түгел, башҡа ваҡ йәнлектәрҙе лә тотҡандар. Айыуға тәпе тоҙағын мин бары тик гәрәй-ҡыпсаҡтарҙа һәм кәлсер-табындарҙа ғына, Урал тауының көнбайыш итәгендә күрҙем.

Шулай уҡ башҡорттарҙың аҫ, сысҡан һәм башҡа ваҡ йәнлектәрҙе тотоу өсөн ҡоролған һуҡма тоҙаҡ та тәпе тип атала һәм ул эсе соҡоп алынған түмәрҙән - һауыттан (а) тора, уға киң ағас ҡалаҡ (б, в) беркетелә. Түмәрҙең уртаһында уйым яһала, уның эсендә аҫҡы ҡалаҡ дәүмәләндәге икенсе ҡалаҡ иркен йөрөй ала. Түмәр эсендәге тышҡы шыналар менән ҡайырып һәм тарттырып бәйләнгән тоҡан еп өҫкө ҡалаҡ өсөн пружина булып хеҙмәт итә. Өҫкө яҡтан урынлаштырылған ҡалаҡ махсус ян (г) һәм уға бәйләнгән телле сирткес (д) ярҙамында тотоп торола (һүрәт).




Башҡорттар араһында һауыт тип аталған һуҡма тоҙаҡ киң таралыу таба. Ҡуян, төлкө тотоу өсөн ҙур һауыттар ҡулланыла, ә аҫ, шәшке, йәтсә өсөн бәләкәйҙәре ҡулланыла.

**(Дауамы бар).**

***✓ Хәҙер юрист һөнәренең бәҫен төшөрҙөләр. Күптәр унда замана модаһы артынан ҡыуып уҡырға инә. Тик ҙур аҡса ярҙамында ғына ысын юрист булыу мөмкин түгел, ғөмүмән, һәр кем был һөнәр эйәһе була алмай.***

# МОДА АРТЫНАН ысын юрист

**Халҡыбыҙ арҙаҡлы, уңған һәм абруйлы шәхестәргә бай. Уларҙың кемеһелер йәмәғәтселеккә киң билдәле булып, һәр башҡарған эше күҙ алдында булһа, икенселәр иһә артыҡ күҙгә бәрелеп бармайынса ғына халҡына, тыуған иленә хеҙмәт итә. Улар биләгән юғары вазифаларына маһаймай, теүәтәйен түргә элмәй, ә бар көсөн һәм һәләтен милләтенең ысын улы йәки ҡыҙы булыуға йүнәлтә. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ, Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса Федераль һалым хеҙмәте идаралығы етәксеһе урынбаҫары Гөлдәр ХӘМИТОВА тап шундай шәхестәрҙең береһе. Уның үҙен тыңлайыҡ.**

## Тәрбиәнең юғары баҫҡысы

Башҡортостандың иң матур төбәктәренең береһе Йылайыр районы Ҡашҡар ауылында донъяға килеп, атай-әсәй хәстәре, өләсәй ҡурсыуы аҫтында иркәләнеп кенә буй еткерҙем. Бөгөнгө уңыштарымдың, яулаған үрҙәремдең башы нәҡ бәхетле бала сағыма барып тоташа, тип ышаныс менән әйтә алам. Атай-әсәйем күп ваҡыт эштә булды, шуға ла мин күберәк өләсәй ҡулы аҫтында, уның йылыһын тойоп, аҡыллы һүҙҙәрен ишетеп үҫтем. Мин әле лә кешеләр менән аралашҡанда өләсәй һабаҡтарынан сығып мөнәсәбәт ҡорам, унан ишеткән мәҡәл һәм әйтемдәрҙе ҡулланып һөйләшәм. Был, бер яҡтан, телмәремде байыта, үҙенсәлекле итә, ә икенсенән, халҡымдың оло тел хазинаһын тирә-яҡтағыларға еткереү мөмкинлеге бирә. Бөгөн килеп, өләсәй тәрбиәһендә сағылған тамырҙарыбыҙ, халҡыбыҙ йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәренең тулылығын һәм йөкмәткеһен аңлап хайран ҡалам. Уның нескә, нәзәкәтле генә итеп беҙгә донъяны аңлатыуы, бар нәмәгә фәлсәфәүи йәһәттән сығып баһа йөрөтөүе һәм беҙгә лә шуны төшөндөрөүе тәрбиәнең юғары баҫҡысы булған, тигән һығымтаға киләм.

## Үҙаллылыҡҡа өйрәтеүсе мәктәп

Ауылыбыҙҙағы мәктәп 8 синыфлы ғына булғанға күрә, күптәр белем алырға Сибай ҡалаһына юллана ине. Ул ваҡытта уҡытыусылыҡ, табип һөнәре популяр булды, шуға күрә мин дә уҡыуымды Сибай педагогия училищеһында дауам иттем. Әйтергә кәрәк, был һөнәрҙе мин күңел талабы буйынса һайламаным. Был бары тик артабан белем алыу, оло тормошҡа юл башлау өсөн эшләнгән аҙым ине. Шулай ҙа Сибайҙа үҙған йылдарымды оло һағыныу һәм йылылыҡ менән иҫкә алам, сөнки улар миңә ысын тормош мәктәбе булды. Училище уҡытыусылары үҙ уҡыусыларына төплө белем биреүгә өлгәшкән, унда алған аҡыл-һабаҡтарҙы әле лә ҡулланам. Нәҡ Сибай педагогия училищеһында мин урыҫ телендә дөрөҫ һөйләшергә, фекер йөрөтөргә, уйларға, грамоталы яҙырға өйрәндем. Шулай уҡ унда уҡыу йылдарында мин коллективлыҡ тойғоһоноң нисек булыуын аңланым, яуаплылыҡҡа, үҙаллылыҡҡа өйрәндем. Ғөмүмән, ятаҡ тип аталған ҙур тормошта бер-береңде тыңларға һәм аңларға өйрәнәһең, кешелеклелек, яҡшылыҡ, мәрхәмәтлек кеүек сифаттарҙы үҙләштерәһең. Шуға күрә Сибайҙа уҡыу миңә уҡытыусылыҡ һөнәренән тыш, донъяла кәрәкле, тормошта лайыҡлы урын табырға ярҙам итеүсе ғилемде лә бирҙе, тип тулы ышаныс менән әйтә алам.

## Һәр кем юрист була алмай

Училищенан һуң, Дүртөйлөлә уҡытҡан осорҙа, мине комсомол секретары, ауыл советы депутаты итеп һайланылар һәм нәҡ ошо вазифаларҙы атҡарыу барышында мин юрист һөнәрен үҙләштереү мөһимлеген аңланым. Кеше менән аралашыу, уларға кәңәш биреү һәм ярҙам итеү өсөн закондарҙы һәйбәт белеү һәм уларға нигеҙләнеп эшләү шарт ине. Шуға күрә белемемде камиллаштырыу маҡсатында Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетына уҡырға килдем. Был инде ныҡлы уйланылған, маҡсатлы аҙым булды.

Өфөлә уҡыған йылдарым да минең тормошомда оло эҙ ҡалдырҙы. Беҙҙе тәжрибәле, юрист һөнәренең бар нескәлеген белгән һәм аңлаған, грамоталы, үҙҙәренә лә, беҙгә лә бик талапсан уҡытыусылар уҡытты. Улар юрист һөнәренең бар асылын аңларға булышлыҡ итте. Юрист, тәү сиратта, ғәҙел булырға, закондарҙы дөрөҫ уҡырға, аңларға һәм тормошта бер кемдең дә ҡыйырһытылыуына юл ҡуймаҫҡа тейеш. Ниндәйҙер хоҡуҡ боҙоусыны ғәйепләү һәм язаға тарттырыу алдынан уны был хәлгә этәргән һәр деталде яҡшылап өйрәнеү, асыҡлау мөһимлеген аңлатты улар. Беҙ үҙебеҙҙең хеҙмәт юлында ошо хәҡиҡәттән тайпылманыҡ.

Учалыла тәфтишсе булып эшләү осоронда бурыстарыма һәр саҡ оло яуаплылыҡ менән ҡараным, минең ҡарамаҡта булған һәр эште ғәҙел тикшереп, бар хәл-ваҡиғаларҙы асыҡларға тырыштым. Кеше яҙмышына битараф булмау һәм ҡоро факттар ғына йыйып, эште тиҙерәк судҡа тапшырырға, тигән принциптан сығып эш итмәү миңә тәфтишсе булараҡ хөрмәт ҡаҙанырға ярҙам итте. Ғөмүмән, ғәҙелһеҙлек һәм битарафлыҡ менән закондар донъяһында ғына түгел, ҡәҙимге тормошта ла көрәшергә кәрәк.

Хәҙер юрист һөнәренең бәҫен төшөрҙөләр. Күптәр унда замана модаһы артынан ҡыуып уҡырға инә. Уларҙы юридик факультетҡа төплө белем алып, юғары профессиональ кимәлдәге юрист булыу, кешегә, йәмғиәткә ярҙам итеү теләге түгел, ә бары тик ошо һөнәр ярҙамында күп аҡса эшләү хыялы алып килә. Кемдер ғаиләһенең ауыҙынан һуңғыһын тартып алып булһа ла балаһын юрислыҡҡа уҡытып сығарырға тырыша. Тик ҙур аҡса ярҙамында ғына ысын юрист булыу мөмкин түгел, ғөмүмән, һәр кем был һөнәр эйәһе була алмай. Был өлкәлә үҙен табыу өсөн кешелә тәбиғәт тарафынан һалынған һәләт, тейешле сифаттар булырға тейеш.

## Беҙҙең төп бурыс - мәғлүмәти ярҙам

Артабанғы эшмәкәрлегем һалым органдары менән бәйле. Был өлкәгә 1993 йылда килдем һәм бына 20 йыл ошо системала эшләйем. Һалым органдарында эшләү өсөн уның йөкмәткеһен, асылын, һалымдарҙың һаналыу механизмын яҡшы белеү мотлаҡ. Шуға күрә "йөҙөп" йөрөп эшләү өсөн Мәскәү ҡалаһының Хөкүмәт янындағы финанс академияһында иҡтисадсы һөнәренә уҡып сыҡтым. Шулай итеп, өсөнсө һөнәремде мин тормош талабы буйынса үҙләштерҙем.

Үҙған 20 йыл эсендә һалым түләүселәрҙең һалым органдарына ҡарата мөнәсәбәтенең үҙгәреүен асыҡ күрәм. Шулай уҡ был ваҡыт арауығында һалым системаһының да халыҡҡа ҡарата ҡарашы үҙгәрҙе. Мин эшләй башлаған йылдарҙа, мәҫәлән, һалымын түләмәгән йәки түләп өлгөрмәгән кешегә 100 процент күләмендә штраф һалына ине. Шуға күрә ул ваҡытта халыҡ беҙгә ҡурҡып ҡараны. 2000 йылдар башында ҡурҡыу тойғоһо нәфрәт, күрә алмаусанлыҡҡа әүерелде. Һалым түләүселәр ҙә закондарҙы үҙләштереп, кодексҡа таянып үҙҙәренең хоҡуғын дауларға, яҡларға өйрәнде. Ә һуңғы йылдарҙа иһә һалым түләүсе беҙҙең эшмәкәрлекте тынысыраҡ ҡабул итә башланы. Үҙҙәре лә яуаплылыҡҡа өйрәнде. Мәҫәлән, һалым түләү иҫкәрмәһен алмағандар беҙгә шылтыратып, ни өсөн тейешле ҡағыҙҙың ебәрелмәүен асыҡлай, ҡасан килеүе хаҡында белешә. Шуға күрә, үҫеп килеүсе һәм унан һуң киләсәк быуындар менән һалым инспекцияһы араһында үҙ-ара аңлашылмаусанлыҡ һәм проблемалар булмаҫ, тип уйлайым.

Һалым кодексына ярашлы, беҙҙең инспекцияның төп бурысы халыҡҡа мәғлүмәти ярҙам күрһәтеү. Әгәр ҙә һалым түләүсе үҙенә тейешле тулы мәғлүмәтте алып та, һалымын түләүен тоҡтарлатҡан саҡта ғына беҙ тейешле саралар ҡулланырға хоҡуҡлыбыҙ.

Кешегә ебәрелгән түләү ҡағыҙындағы һалым суммаһы төрлө дәүләт учреждениелары биргән мәғлүмәттән сығып төҙөлә. Мәҫәлән, йорт-ҡура, ер хаҡында мәғлүмәтте кадастр хеҙмәте, транспортҡа бәйле мәғлүмәтте ЮХХДИ органдары аша алабыҙ. Әгәр ҙә уларҙың мәғлүмәт базаһында хата китһә йәки ниндәйҙер мәғлүмәт индерелеп өлгөрмәһә, тәбиғи, беҙҙең тарафтан ебәрелгән ҡағыҙҙағы һалым суммаһы дөрөҫ булмаясаҡ. Шуға күрә, һалым түләүселәрҙе, бигерәк тә физик шәхестәрҙе, иғтибарлы булырға саҡырам. Әгәр ҙә күрһәтелгән сумма менән килешмәйһегеҙ икән, һалым инспекцияһына барып, асыҡларға иренмәгеҙ. Һалым инспекцияһы ҡағыҙға теркәлгән сумманың дөрөҫ булыуын иҫбат итергә, әгәр ҙә иҫбат итә алмай икән, сумманы үҙгәртергә бурыслы. Ләкин ҡайһы берәүҙәр, асыҡлап тормайынса, яңылыш билдәләнгән сумманы барып түләп тә ҡуя. Бындай осраҡта һалым түләүсе ул сумманы өс йыл дауамында кире ҡайтарып алырға хоҡуҡлы.

## Уңышлы булыуҙың сере - яуаплылыҡ

Ҡайҙа эшләһәң дә, ниндәй вазифа биләһәң дә, уңышҡа өлгәшеүҙең төп сере - яуаплылыҡ, үҙ бурысыңа бармаҡ аша ҡарамайынса, эшеңде урынеренә еткереп үтәү. Халҡыбыҙҙың дөрөҫ һәм үткер бер мәҡәлендә: "Урын кешене түгел, ә кеше урынды биҙәй", тиелә. Был, ысынлап та, шулай. Һәр кемдең үҙ эшен намыҫлы һәм урын-еренә еткереп башҡарыуы шәхси уның ғына түгел, ә дөйөм коллективтың уңышлы эшенә этәргес биреүсе көс. Әлбиттә, кешене көсләп йәки өгөтләп яуаплылыҡҡа өйрәтеп булмай, сөнки эшһөйәрлек, егәрлелек, булдыҡлылыҡ сифаттары бәләкәйҙән кеше холҡона һалына, булмышына әүерелә. Шуға күрә, эшкә булған ҡараштарҙың төрлөлөгөнә аптырарға ярамай. Тағы шуны әйткем килә: ҡайһы берәүҙәр уйлағанса, булдыҡһыҙлыҡ ниндәйҙер айырым милләтте сағылдырыусы сифат түгел, барыһы ла кешенең тәрбиәһенә, ундағы эске яуаплылыҡ тойғоһона ҡайтып ҡала.

## Етәкселектә - ҡатын-ҡыҙ

Ҡатын-ҡыҙҙың етәксе булыуына йәмәғәтселек нисектер һиҫкәнеп ҡарай. Быны мин үҙ миҫалымда асыҡ күрәм. Эш буйынса төрлө ойошма, учреждениеларҙа сығыштар яһарға, докладтар уҡырға тура

***Һалым кодексына ярашлы, беҙҙең инспекцияның төп бурысы халыҡҡа мәғлүмәти ярҙам күрһәтеү. Әгәр ҙә һалым түләүсе үҙенә тейешле тулы мәғлүмәтте алып та, һалымын түләүен тоҡтарлатҡан саҡта ғына беҙ тейешле саралар ҡулланырға хоҡуҡлыбыҙ. Кешегә ебәрелгән түләү ҡағыҙындағы һалым суммаһы төрлө дәүләт учреждениелары биргән мәғлүмәттән сығып төҙөлә. Мәҫәлән, йорт-ҡура, ер хаҡында мәғлүмәтте кадастр хеҙмәте, транспортҡа бәйле мәғлүмәтте ЮХХДИ органдары аша алабыҙ. Әгәр ҙә уларҙың мәғлүмәт базаһында хата китһә йәки ниндәйҙер мәғлүмәт индерелеп өлгөрмәһә, тәбиғи, беҙҙең тарафтан ебәрелгән ҡағыҙҙағы һалым суммаһы дөрөҫ булмаясаҡ. Шуға күрә, һалым түләүселәрҙе, бигерәк тә физик шәхестәрҙе, иғтибарлы булырға саҡырам. Әгәр ҙә күрһәтелгән сумма менән килешмәйһегеҙ икән, һалым инспекцияһына барып, асыҡларға иренмәгеҙ.***

***✓ Үҙемдекен иҫбат итергә тырышмайым. Был осраҡта уларҙы иғтибар менән тыңлайым, ләкин аҙаҡ инҡар итмәҫлек аныҡ факттар килтереп, һәр һүҙемдә нигеҙләп, һығымталар эшләп, дөрөҫлөгөмдө иҫбат итәм.***

килә. Миңә һүҙ бирелгәс, залда ултырыусы ир-егеттәрҙең "Был ҡатын-ҡыҙ нимә әйтер?", "Нимә һөйләгән булыр икән?" һәм башҡа ошондай ҡараштарын, ирен сите менән генә йылмайыуҙарын күрәм һәм тоям. Ләкин мин бер ҡасан да бындай ҡараштарҙан баҙап ҡалмайым, юғалмайым, һөйләр һүҙҙәремде онотмайым. Сығыш яһар алдынан үҙемде эстән генә эшлекле тулҡындарға көйләйем һәм мәғлүмәтте аныҡ, асыҡ, аңлайышлы, теүәл итеп аудиторияға еткерәм. Тәүҙә мыйыҡ осонан ғына йылмайып ултырыусы ир-егеттәр һинең ысынлап та үҙ эшеңде һәйбәт белеүеңде, теманды яҡшы аңлауыңды, был мәсьәләлә компетентлы булыуыңды аңлау менән ҡараштарын үҙгәртә.

лайым, ләкин аҙаҡ инҡар итмәҫлек аныҡ факттар килтереп, һәр һүҙемдә нигеҙләп, һығымталар эшләп, дөрөҫлөгөмдө иҫбат итәм.

### Етәксе булыуҙың ыңғай һәм кире яҡтары

Эшемдең, вазифамдың ыңғай яғы тип, тәү сиратта, халҡыма ярҙам итеү мөмкинлегемдең юғары булыуын билдәләр инем. Беҙҙең башҡорт әҙәпһеҙ, әрһеҙ түгел, бөтәһенә лә түҙә, күнә торған халыҡ. Ләкин сабырлыҡтың да төбө барлығын оноторға ярамай, сөнки башҡорт бер ҡыҙһа, ҡуҙын һүндереүе ауырға төшә. Беҙҙең халыҡ шулай уҡ ялыу яҙып бармай, тормоштоң ауырлығына зарланып ултыр-

Ә вазифалы эш урыны биләүемдең төп етешһеҙлеге - балаларыма, туғандарыма һәм дуҫтарыма бүлгән ваҡыт тарлығы. Улар менән иркенләп һөйләшеп-аралашып ултырыу, байрамдарҙы бергә ҡаршылау - һирәк эләккән бәхет. Хатта телефон аша ла ваҡыт бүлә алмаған ваҡыттар йыш була. Был, әлбиттә, дөрөҫ түгел, беҙҙең барыбыҙға ла бөгөнгө тормош менән йәшәү, нәҡ бөгөн ғаиләңә, яҡындарыңа иғтибарлы булыу мөһим. Иң мөһиме, һуңынан кемгәлер кәрәк сакта бер генә минут ваҡыт бүлә алмаған өсөн үкенеүҙәр булмаһын.

### Ғаиләме, эшме?

Ҡатын-ҡыҙ Алла тарафынан донъяны дауам иттереүсе итеп яратылған, шуға күрә бала та-

маған ваҡытымды отпуск ваҡытында тулыһынса ҡаплайым. Ялымда балалар менән республиканың бөтә райондарын тиерлек йөрөп сығабыҙ. Уларға мин Башҡортостан тәбиғәтенең матурлығын, илебеҙҙең хозурлығын күрһәтәм, үҙебеҙҙең халыҡ араһына алып сығам, башҡорттоң йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырам.

### Йәштәрҙә патриотлыҡ тойғоһо тәрбиәләү

Һәр кешенең йөрәгендә патриотлыҡ, илһөйәрлек тойғоһо йәшәй. Кемдәлер ул асығыраҡ сағыла, икенселәр уны тик

илдәрҙә күпләп беҙҙең ҡәрҙәштәр, милләттәштәр, Башҡортостанда тыуған кешеләр ғүмер итә, балалар үҫтерә. Бөгөнгө көндә йәштәр ҙә күпләп сит тарафтарға юллана. Ләкин ундағы тормош ниндәй генә еңел, рәхәт, иҫ китерлек булмаһын, уларҙың барыһының да тыуған яғын һағынып йәшәүенә иманым камил. Беҙ гүзәл Башҡортостанда, мәғрур Урал тауы итәгендә тыуып-үҫкәнбеҙ, ошонда кендегебеҙ киҫелгән, ошонда береккәнбеҙ һәм ниндәй милләт вәкиле булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, Башҡортостанды яратабыҙ. Мин, мәҫәлән, сит төбәктәргә сыҡһам, үҙемдең тыуған еремде, халҡымды, йырҙарымды

# ЭЙӘРЕП КЕНӘ...

## булып булмай



Шуға күрә, күпселек урында етәксе ролен ир-егеттәр үтәһә лә, үҙ эшен яҡшы белгән, эшлекле, юғары вазифа биләгән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа етерлек арабыҙҙа.

### Ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттәр мөнәсәбәте

Беҙ хисле итеп яратылғанбыҙ һәм ошо хис-тойғоларыбыҙҙы ир-егеттәргә түгергә яратабыҙ. Ләкин үтә хис-тойғоло булыу менән бер рәттән, ҡатын-ҡыҙ аҡыллы, тәрән белемле лә. Тәүҙә хис-тойғо менән эш итһәк тә, һуңынан аҡыл һәм уйлап эш итеүебеҙ барыһын да үҙ урынына ҡуя. Ләкин ир-егеттәр үҙ фекерен беҙҙең тәүге "ҡылығыбыҙҙан", йәғни хис-тойғоларыбыҙҙы күрһәтеүҙән сығып төйнәй. Шуға күрә, беҙгә хистәребеҙҙе бер аҙ ауыҙлыҡларға өйрәнергә кәрәк. Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, ир-егеттәргә һәр ваҡыт үҙҙәрен ир итеп тойорға мөмкинлек бирергә, уларҙың көс-ғәйрәтенә таянырға өйрәнергә, уларҙың эшләгән эштәрен күрә һәм баһалай белергә тейешбеҙ. Ир-ат менән һөйләшә белеү ҙә ҙур оҫталыҡ талап итә. Ғөмүмән, тәбиғәт беҙҙе ҡапма-ҡаршы ике енес итеп яралтҡан, әммә ләкин ул беҙгә бер-беребеҙҙе аңлап һәм хөрмәт итеп йәшәрлек аҡыл биргән. Был аҡылды файҙаланмау ахмаҡлыҡ булыр ине.

Мин, етәксе булараҡ та, ҡатын-ҡыҙ булараҡ та, ир-егеттәргә бер ҡасан да баҫым яһамайым, уларҙың ролен кәметмәйем, кәмһетмәйем, түбәнһетмәйем. Ир-егеттәр менән бәхәскә ингән осраҡта ла, хистәр йөгөнтөһөнә бирелеп, үҙемдекен иҫбат итергә тырышмайым. Был осраҡта уларҙы иғтибар менән тың-

май, тейешле булған һәр нәмәне эшләй.

Республика райондарына йыш сығырға һәм халыҡҡа һалым өлкәһендәге мәсьәләләр буйынса аңлатыу эштәре алып барырға тура килә. Бындай осрашыуҙарҙа тәүҙә: "Килде инде, "түләгеҙ" тиеүҙән башҡа нимә әйтһен", "Һалым таптыра башлай инде" тигән ҡараш-

быу һәм лайыҡлы итеп тәрбиәләү уның тәүбурыстарының береһе. Ләкин бөгөнгө заман талаптары был бурысҡа үҙенең төҙәтмәләрен индермәй ҡалмай. Вазифалы урын биләгән ҡатын-ҡыҙҙың, әгәр ҙә ул ысынлап та үҙ урынында булһа һәм эшен яратып башҡарһа, күңеленең яртыһы - ғаиләһендә, ә ҡалған яртыһы -

***Эшемдең, вазифамдың ыңғай яғы тип, тәү сиратта, халҡыма ярҙам итеү мөмкинлегемдең юғары булыуын билдәләр инем. Беҙҙең башҡорт әҙәпһеҙ, әрһеҙ түгел, бөтәһенә лә түҙә, күнә торған халыҡ. Ләкин сабырлыҡтың да төбө барлығын оноторға ярамай, сөнки башҡорт бер ҡыҙһа, ҡуҙын һүндереүе ауырға төшә. Беҙҙең халыҡ шулай уҡ ялыу яҙып бармай, тормоштоң ауырлығына зарланып ултырмай, тейешле булған һәр нәмәне эшләй. Республика райондарына йыш сығырға һәм халыҡҡа һалым өлкәһендәге мәсьәләләр буйынса аңлатыу эштәре алып барырға тура килә. Бындай осрашыуҙарҙа тәүҙә: "Килде инде, "түләгеҙ" тиеүҙән башҡа нимә әйтһен", "Һалым таптыра башлай инде" тигән ҡараштар менән осрашам, ләкин рәсми телдә түгел, ә үҙебеҙсә, халыҡсан тел менән барыһын да аңлатып, өйрәтеп, һәр кешенең хәлен айырым ҡарағандан һуң, ҡараштар үҙгәрә. Бына ошондай ваҡыттарҙа мин үҙемдең етәксе булыуымдың ыңғай яғын күрәм. Халыҡ һалым органдарында ла үҙенең башҡорт ҡыҙы эшләүен һәм ярҙам, кәңәш һорап килеүсе һәр кемгә ярҙам итергә әҙер булыуын белһен, тип тырышам.***

һағынып, ашҡынып ҡайтам. Шуға күрә ҡайҙалыр тыуған яҡты һағынып, зар-интизар булып йәшәмәҫ өсөн, тыуып-үҫкән ерендә ташламаҫҡа кәрәк.

тар менән осрашам, ләкин рәсми телдә түгел, ә үҙебеҙсә, халыҡсан тел менән барыһын да аңлатып, өйрәтеп, һәр кешенең хәлен айырым ҡарағандан һуң, ҡараштар үҙгәрә. Бына ошондай ваҡыттарҙа мин үҙемдең етәксе булыуымдың ыңғай яғын күрәм. Халыҡ һалым органдарында ла үҙенең башҡорт ҡыҙы эшләүен һәм ярҙам, кәңәш һорап килеүсе һәр кемгә ярҙам итергә әҙер булыуын белһен, тип тырышам.

эшендәләр, тип уйлайым. Шәхсән үҙем ошо принциптан сығып йәшәйем һәм эшләйем. Ни тиһәң дә, үҙеңде бары тик ғаиләгә генә бағышлау эштә ҙур уңыштарға өлгәшеүгә ҡамасаулай, ә тик эш менән генә йәшәү ғаилә тормошона, балалар тәрбиәһенә ҙур зыян килтерә. Әлбиттә, үлсәү бер тигеҙ генә була алмай һәм уның һауыттары теге йәки был яҡҡа ауышып тора. Үҙемә килгәндә, үлсәүҙең эш һауыты күберәк үҙенә ауыштыра, ләкин ғаиләмә эш көндәрендә бүлә ал-

күңел түрендә генә йөрөтә. Беҙ балаларҙа, йәштәрҙә патриотлыҡ, илһөйәрлек тойғоларын тәрбиәләргә, уларға был хисте һеңдерергә тейешбеҙ. Ләкин бындай тәрбиә бирергә ынтылған кеше, тәү сиратта, үҙе ошо тойғолар сорнауында йәшәргә тейеш. Үҙең белмәгән, аңламаған әйберҙе өйрәтеп булмаған кеүек, үҙеңә ят булған тойғоларҙы ла балаға аңлатып, һеңдереп булмай.

Тормош елдәре кешене төрлө ҡитғаларға ташлай. Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә, сит

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Шәхестең әхлаҡи яҡтан камиллығы уға бәләкәйҙән һалынған милли үҙаң, милли абруй кеүек төшөнсәләргә бәйле. Тик ошондай төшөнсәләр менән һуғарылған күңел генә тыуған иленең һәм халҡының яҙмышы өсөн янып йәшәргә, эшендә юғары үрҙәргә артылырға, уңыштар яуларға булышлыҡ итә. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ үҙенең эше, йәшәйеше менән ошо хәҡиҡәтте тулыһынса иҫбат итә. Уның үҙендә милләттең йөҙөн билдәләүсе аҡыл, эшлеклелек һәм намыҫ кеүек сифаттарҙы туплауы иһә алдан әйтелгәндәрҙе тулыландыра ғына.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЯЛТЫРАУЫҠ ТИҘ ЫЛЫҠТЫРҺА ЛА...

**Йәлил СӨЛӘЙМӘНОВ, рәссам, Башҡортостан рәссамдары берлеге рәйесе урынбаҫары:** Бер минутлыҡ ләззәттәр, бер миҙгеллек ҡиммәттәр заманында йәшәйбеҙ кеүек. Ярым фабрикаттар, бер тапҡыр ҡулланылып, ташлана торған һауыт-һабалар заманы килде, тип тә әйтке килә. Был күренеш ижади даирәләргә лә үтеп инә башланы, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Һынлы сәнғәтте генә алып ҡарайыҡ. Бөгөн күптәр картиналар галереяларына йөрөүҙе ситкә ҡуйып, күберәген ялтыр-йолтор әйберҙәр, ҡиммәтле автомобилдәр, гүзәл һынлы "йондоҙҙар" төшөрөлгән журналдар аҡтарып, ваҡытын уҙғара. Ә баш ҡалабыҙҙа билдәле-билдәле рәссамдарҙың матур-матур күргәҙмәләре үтһә, залдар, ниңәлер, буш тора. Хәйер, быының сәбәбе лә ябай. Мәғәнәһе төпкә йәшерелгән картиналар янында туҡталып, автор әйтергә теләгән һүҙ тураһында уйланып, әҫәргә мәғәнәүи анализ яһарға теләмәйбеҙ шул бөгөн.

Тамашасыларҙың асыҡ-ярыҡ, ялтырауыҡ әҫәрҙәргә өҫтөнлөк биреүе, һөҙөмтәлә күргәҙмәләргә йөрөмәүе арҡаһында ҡайһы бер профессиональ рәссамдар ҙа күргәҙмәләрҙә ҡатнашыуҙан баш тарта башланы. Мин дә халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә ҡатнашыу тәҡдимдәрен кире ҡаҡҡаным булды. Уларҙа ҡатнашырға теләмәгәндән түгел. Уларҙа ҡатнашыу өсөн финанс мөмкинлектәр кәрәк. Ә дәүләтебеҙ, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, рәссамға ярҙамға килмәй, уның ижади эшенә булышлыҡ итмәй. Ошо ситуацияла бөгөнгө йәш рәссамдар, совет осоронда тәрбиә алған оло быуын менән сағыштырғанда, үҙҙәрен күпкә ышаныслыраҡ тота. Ни тиһәң дә, улар был заманға нығыраҡ яраҡлашҡан һәм дәүләт ярҙамын көтмәй, төрлө юлдарын табып, аҡса эшләргә тырыша. Шуға ла күп кенә йәш рәссамдар рәссамлыҡты дизайнерлыҡҡа алыштырҙы, дизайнерлыҡ аҡсалы эш булыуы менән ылыҡтыра уларҙы.

Беҙгә, һынлы сәнғәткә 90-сы йылдарҙа килгән быуынға, ижад менән шөғөлләнер өсөн мөмкинлектәр киңерәк ине шул заманында. Дәүләт ярҙамына өмөт итә ала инек, һәр хәлдә. Сөнки, Советтар Союзынан ҡалған инерция һаҡланды, шунлыҡтан рәссамдарға ярҙам бар ине. Мәҫәлән, беҙҙең тәүге картиналарҙы музейҙар һатып алды, картиналарҙан килгән аҙмы-күпме аҡса, барыбер күңелде йылыта ине. Ә бөгөн, ентекләп ҡарағанда, 90-сы йылдарҙан яҡшыраҡ та йәшәйбеҙ кеүек, әммә талантлы, күренекле рәссамдарҙың картиналары ижадханаларҙа саң йыйып тора, уларҙы һатып алыу менән шөғөлләнеүсе махсус дәүләт ойошмаһы юҡ. Беҙ ҙә, урта быуын рәссамдары, ижадты матди байлыҡ сараһы итеп ҡабул итә алмай, оҙаҡ аҙапланһаҡ, күңел ғазаптары кисерһәк тә, баҙар иҡтисадына күнегергә мәжбүр булдыҡ. Артабан үҫер, ғаиләңде туйҙырыр өсөн күрелгән сара ине был аҙым. Беҙ, мәҫәлән, Әмир Мәзитов исемле дуҫым менән Башҡортостан тематикаһынан тыш, төрки донъяһына ла сыға, шул даирәләргә лә үтеп инә башланыҡ. Күреүегеҙсә, төрки донъяһына мөрәжәғәт итеүебеҙ үтә яҡшы тормоштан килеп сыҡҡан эш түгел, әммә быының бер ыңғай яғы бар: башҡорт мәҙәниәте, атап әйткәндә, уның һынлы сәнғәте тураһында күрше төбәктәр яҡшыраҡ белеп ҡала.

Башҡорт һынлы сәнғәтенең бөгөнгө хәлен яҡшыртыуҙың берҙән-бер юлы, минеңсә, был тармаҡҡа милли спонсорҙар йәлеп итеү. Спонсорҙар булһын өсөн иң тәү сиратта үҙебеҙҙең урта һәм эре эшҡыуарлыҡ вәкилдәребеҙ, банкирҙарыбыҙ булырға тейеш. Шуға күрә, йәштәр, үҫегеҙ, уҡығыҙ, мәҙәниәтебеҙҙе үҫтерешегеҙ!

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**




Өйөнә ахмалға төшөп ҡайтып ингән Гөльямалды күршеһе Сибәрбикә инәй күҙе йәшкәҙәп ҡаршы алды:

- Ҡайтып, тауыҡтарыма, бәпкәләремә ем генә һалып килдем, балаҡайым. Хәл өҫтөндә ятҡан әсәйең күҙ менән ҡаш араһында нихәл итеп урынынан торған, нихәл итеп башын бәреп өлгөргән мейес ҡашағаһына. Инһәм, башы ҡанһырап, иҙәндә ята, әлдә анау ил мөстәне Тәскирәне күреп ҡалдым, уны саҡырып индереп, икәүләп саҡ йәтешләп һалдыҡ һикегә...

Сәй эсереп, йомалап, көскә тынысландырҙы ҡарсыҡты Гөльямал. Яңғыҙ шул, балалары таралып бөттө, бабайы ла ике йыл элек мәрхүм булып ҡуйҙы, өйҙән әҙ генә ситкә атланымы - көнө күршеләренә төшә. Аҙна буйы һикенән дә тормаған әсәһенең бөгөн килеп үҙе юҡта түшәгенән ҡалҡыныуын әйт. Ана, телдән ҡалып, йәнә иҫһеҙ булып ята.

-Инәй, күрше ауыл муллаһын саҡырҙым. Килергә вәғәҙә биреп ҡалды. Үҙебеҙҙең мулла булмауы бигерәк ҡыйын. Ул килгәнсе, үҙем ясин сыға торайыммы икән әллә?

-Шулай ит, балаҡайым, Аллам һаҡлаһын, ясинһыҙ үтеп китмәһен. Бар, бар, ҡойоноп-сайынып сыҡ, мин ҡарап ултырып торайым...

Гөльямал, ғөсөл ҡойоноп, әсәһенең ҡартлыҡ ныҡ ҡаужытҡан, йоҡарған кәүҙәһе янына ултырып, белгән сүрәләрен, китаптан ҡарап ясин сүрәһен аҙағынаса уҡып та өлгөрмәне, мулла ла килде. Ул ясин сыҡҡанда, әсәһе йыш- йыш тын ала башланы, уҡып бөтөүгә йөҙө асылып, тынысланғандай итте, таң атыуға был донъяларҙы ҡалдырып китеп тә барҙы. Бахырҡайың, әйтерһең, шул ясинды ғына көтөп ятҡан.

Ҙур йортонда, етемһерәп, япаяңғыҙы тороп ҡалды Гөльямал. Медпунктта йыйыштырыусы булып эшләй. Ярты көнө эштә, ярты көнө йә баҡсаһында, йә ҡураһында себеш, бәпкәләре менән мәж килеп үтә, ә бына кис еттеме - толҡаһыҙ күңеленә урын таба алмай. Күҙен йоҡо алмай, уйы менән үткәндәрҙе мең урай, ҡайһы саҡта таңға ҡарай ғына ойоп китә.

Бер көн шулай көтөүҙән ҡалып, һыйырын ҡыуып ҡайтып килһә, урамда бәпкә көтөп ултырған Сибәрбикә инәй үҙ янына саҡырып туҡтатты.

- Тәскирәне әйтәм, йәшерен батырын түгел, һүҙсән, ағасауыҙ икәнен беләбеҙ, әммә был ҡәҙәр ҙә ҡара эсле тип уйламай инем. Кисә ҡоҙағыйҙарға инһәм, был да шунда. Ауыҙ тултырып "Гөльямал әсәһенең үлер алдынан башын ярған, эй йәлләнем инде..." тип һөйләп ултыра, һүҙ ҡыҫтырып аңлатмаҡ булам, иманһыҙ нәмә, һаман үҙенекен тылҡый, ауыҙҙы ла астырмай...

Былай ҙа күңеле болоҡһоп йөрөгән ҡатындың өҫтөнә бысраҡ һыу ҡойғандай булдылар. Ҡулындағы таяғын атып бәрҙе лә, ярһып типкән йөрәген усы менән баҫып, сағылдағы зыяратҡа менеп китте. Туҡтатырға тырышып, Сибәрбикә инәйҙең ҡысҡырғаның яҙа-йоҙа ғына ишеткәндәй булды. Ғәрлегенә, йөрәгенең әрнеүенә сыҙай алмай, әсәһенең ҡәберенә барып ауҙы:

- Улай түгел бит, әсәй! Нишләп кешеләр шул ҡәҙәре ҡаты бәғерле икән? Әсәй, әсәкәйем, улай түгел бит! Ауыр һүҙ әйткәнем дә булманы бит һинә!

- Хәййә ғәләс-саләәһ! Хәййә ғәләл-фәләәх! Ләә иләәһә илләллааһ!..

Был доғалар зарлана-зарлана үкһегән ҡатындың ҡолағына ҡайҙандыр алыҫтан ишетелде. Тора-бара тауыш яҡынайҙы, эргәһенә үк килеп етте һәм ҡапыл ҡарға ҡарҡылдауы менән алмашынды. Гөльямал һиҫкәнеп башын күтәргәйне, йөрәге жыу итеп ҡалды - әсәһенең ҡәбере өҫтөндәге ташы, уратылған ҡоймаһы һауаға күтәрелеп, зыр-ғәләмәт килеп әйләнә. "Сағым, буғай был" тип, Гөльямал күҙҙәрен сытырҙатып йомдо, кире асҡанда ҡойон, дыулатып, зыярат эсендәге күбәләрҙең баштарын туҙҙырып, Оло кисеү яғына китеп бара ине. Нисек һикереп торғанын, зыяраттан нисек сығып йүгергәнән һиҙмәй ҙә ҡалды. Зыярат-тан йүгерә-саба ҡайтып килгән ҡатынды картуф утап йөрөгән ауылдаштары сәйерһенеп күҙәтте.

Атын етәкләп ҡаршы килгән йәш кенә ир Гөльямалдың ҙур асылған күҙҙәрен, аҡ ҡағыҙҙай йөҙөн күреп, шомланып, ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай, урынынан ҡуҙғала алмай, артынан байтаҡ ҡарап торҙо. Ә ҡатын һис кемде күрмәне, һис нәмә ишетмәне, өйөнә ингәс кенә иҫенә килгәндәй булды.

"Нишләп күтәрелде һуң әле ул зыяратҡа? Нимә булды һуң әле был? Хоҙайым Тәғәләм, кирәмәт күрһәттең бит миңә, баҡыйлыҡҡа күскән әруахтарҙы донъяның сүп-сары менән борсоп йөрөмә, тиеүең инде..."- башына килгән тәүге уйы шул булды. Аҙаҡ, ғөсөлләнеп, Аллаһы Тәғәләнән, әсәһенән ғәфү үтенеп, оҙаҡ итеп намаҙ уҡыны Гөльямал.

Аҙна, ун көн үттеме-юҡмы, башы шау ҡан булып, Тәскирә килеп инде.

-Апай, бәйлә әле, ҡыҙым ҡайсы менән бәреп тиште. Дилдалайҙа йөрөй торғас, кәрәген тапҡан - эсеп ҡайтҡан, әрләгәйнем - оҡшатманы.

-Ҡылған ҡылыҡтарыңдың ғөҙөрөн күтәрәһең, ҡаҡлығып үҙеңә килде, Тәскирә. Ауыр сағымда нисек рәнйеттең мине, ә хәҙер, йомошоң төшөп, үҙең индең...

-Асыуланма инде, апай. Ҡайһы берҙә телем һөйләгәндәргә үҙемдең дә уш китә, - ҡатын ихахайлап көлөп ебәрҙе. Гөльямал уны тағы әрләргә уйлағайны, кире төңөлдө, ни тиһең инде быңдай бәрҙе-орҙо эт ҡайышына, асыуланам тиһәң, асыуланып та булмай хатта.

Алабарман Тәскирә башын бәйләтеп сығып китте, ә Гөльямал яҡшылыҡты ла, яманлыҡты ла Аллаһы Тәғәләнең яуапһыҙ ҡалдырмағанына йәнә бер ҡабат инанды, йәнә бер ҡабат Хоҙай ебәргән һынауҙы, сабырһыҙланып, оло бәхетһеҙлек күреп, тыу һымаҡ ялбыратып йөрөгәне өсөн үкенеп, ғәфү үтенде...

**Әлисә НИҒМӘТУЛЛИНА.**
**Ишембай районы.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Белеүегеҙсә, баҫмабыҙҙа күп йылдар күренекле башҡорт яҙыусыһы, хикәйә оҫтаһы Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы бара. Был бәйге барышында күп яңы исемдәр асылды, өмөтлө хикәйәселәр барлыҡҡа килеүенә шаһит булынды. Конкурс быйыл да дауам итәсәк. Тик шундай теләгебеҙ бар: авторҙар үҙ әҫәрҙәрендә заман һәм заманға ҡулайлашҡан, аҡыллы, көслө, лайыҡлы йәшәгән башҡорт кешеһе образын - бөгөнгө көн геройын һынландырһын ине. Был, әлбиттә, ҡәтғи шарт түгел. Ә шулай ҙа... Сәхнәлә, китаптарҙа, тормошта бөгөнгө көн геройы, лидерҙар күренмәй. Уларҙы беҙ әҙәби әҫәрҙәребеҙҙә булһа ла тыуҙырайыҡ. Ә тормошта беҙ һәр ваҡыт китаптарҙа яҙылған геройҙарға тиңләшергә тырышабыҙ. Хикәйәләр көтәбеҙ һеҙҙән!**

***✓ Беҙ, ауылда үҫеп, хәҙерге ваҡытта ҡалала йәшәгәндәр, тыуған ауылдарыбыҙҙы онотмай, мөмкинлек булғанда ҡайтып, был ауыл халҡының Өфөлә яҡлаусылары бар икәнлеген белдерә йөрөргә тейешбеҙҙер.***



ФЕКЕР ҠОРО

**Ҡалала ғүмер итһә лә, тамырҙары ауылда булған һәр кем күңеле менән тыуған яҡтарына ашҡына, йәй етһә, ял мәлдәрендә ул ошо ашҡыныуҙарын ысынбарлыҡҡа әйләндерә. Ләкин ауыл тормошо ялдан ғына тормай, уның тиҙ арала хәл итәһе мәсьәләләре лә бихисап һәм күп осраҡта ауыл үҙ проблемалары менән япа-яңғыҙ тороп ҡала. Шуныһы ҡыҙғаныс. Шуға күрә республика киләсәген ҡайғыртыусы, халыҡ мәнфәғәте өсөн тырышыусы, телем, илем, тип яныусы шәхестәребеҙҙең иғтибары ауыл яғына йүнәлеүе бик мөһим бөгөн. Халыҡты халыҡ иткән йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, тел байлығын юғалтмай һаҡлап килгән ауылдар һаҡланһын һәм тулы ҡанлы тормош менән йәшәһен өсөн ни эшләргә? Ауылдың көнитмешен нисек йәнләндерергә, йәштәргә, ғөмүмән, милләттәштәребеҙгә ниндәй ярҙам күрһәтергә мөмкин? Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Ғаилә, әсәлек, балалыҡ һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссияһының сираттағы ултырышында ҡатнашыусылар нәҡ ошо һорауҙарға яуап эҙләне.**

# АУЫЛДАРҒА...

## йышыраҡ ҡайтайыҡ

Комиссия рәйесе **Гөлфиә Янбаева** тикшереләсәк һорауҙы ошолай ҡуйҙы: "Беҙ барыбыҙ ҙа ауыл балалары. Өфөгә килеп, юғары уҡыу йорттарында уҡығанбыҙ, белем, һөнәр үҙләштергәнбеҙ, хәҙер иһә һәр кемебеҙ үҙенең эш урынында республикабыҙға хеҙмәт итәбеҙ, милләтебеҙгә ҡағылған мәсьәләләргә лә битараф түгелбеҙ, ҡулыбыҙҙан килгәнде атҡарырға, үҙ һүҙебеҙҙе ишеттерергә тырышабыҙ. Ләкин үҙебеҙҙең тәүйортобоҙҙоң - ауылдарыбыҙҙың ниндәй хәлдә икәне барыбыҙға ла билдәлеме? Ҡайтып, хәл белешә йөрөйбөҙмө, әллә оноттоҡмо юлды? Бәлки, унда беҙҙең ярҙамға мохтаждарҙыр?"

Фекер алышыуҙы башлап ебәреп, яҙыусы **Мәрйәм Бураҡаева**, ауылдарға ҡайтып йөрөүҙең, ауыл халҡына үҙебеҙ белгәнде өйрәтеүҙең, халыҡ менән эшләүҙең мөһимлеген билдәләне. Ләкин шул уҡ ваҡытта ауыл проблемаларына үтеп инмәйенсә, уларҙы аңламайынса тороп, бер ниндәй уңышҡа өлгәшеп булмаясағын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ә быны өсөн аныҡ эштәр башҡарырға кәрәк, тине ул. Ысынлап та, ауылдарҙа халыҡ дәртле һәм һәр кем үҙ алдына, ауылымды күтәрәм, тигән маҡсат ҡуйһа, яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеп буласаҡ. Был юҫыҡта Мәрйәм Бураҡаева уңышлы эшмәкәрлек алып бара. Ул үҙ алдына Ейәнсура районының Абҙан ауылын һаҡлап ҡалырға, уның юғалыуына юл ҡуймаҫҡа, тигән маҡсат ҡуйған. Ул, тәү сиратта, ауыл халҡын эш урыны, аҡса менән тәьмин итеүҙең мөһимлеген аңлап, башҡорт милли аштары ризыҡтарын етештереү цехы ойошторған. Бөгөнгө көндә цехта даими 15-20 ҡатын-ҡыҙ эшләй, ә заказдар күбәйгән саҡта уларҙың һаны тағы ла арта, ти Мәрйәм апай. Быңдай эшмәкәрлек, халыҡҡа эш урыны булдырыу менән бер рәттән, башҡорт милли аштарын тергеҙеүгә һәм уларҙы популярлаштырыуға ла ярҙам итә. Ғөмүмән, Мәрйәм апай Бураҡаева ауыл тормошон йәнләндереүҙең төрлө юлдарын эҙләй һәм уларҙы тормошҡа ашыра. "Беҙҙең халыҡ ҡул эшенә шул тиклем оҫта: быйма-кейеҙен баҫа, матур итеп ҡорама ҡорай, шәлен бәйләй, ләкин уларҙы һата белмәй. Ошо шөғөлдәрҙе баҙар кимәленә күтәреү һәм һатыуға өйрәтеү - беҙҙең инҙә", - ти ул. Әлеге мәлдә ул шулай уҡ ауылдаштарын интернет аша дебет шәл һатыу серҙәренә өйрәтеү менән мәшғүл. Һүҙен йомғаҡлап, Мәрйәм апай Бураҡаева ауылдарҙа мәктәптәрҙе һаҡлап ҡалыуҙың мөһимлеген дә һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Мәктәптәр аҙмышына битараф булмай, уларға күҙ-ҡолаҡ булып йөрөһәк, насар булмаҫ ине", - тип тамамланы ул фекер ебен.

Илдең, шул иҫәптән ауылдың да киләсәге - балалар. Шуға күрә уларҙың мәктәптә белем алыуын ғына түгел, ә тәрбиәгә, ялын ойоштороуға ла ҙур иғтибар бирергә кәрәк, тип ялғанып китте артабанғы һөйләүсе. Был да бөгөн көн ҡаҙағына һуҡҡан мәсьәлә. БР Мәғариф министрлығының булек етәксеһе **Мәрүә Ғилметдинова** был йәһәттән республикалағы "Йәйләү" йәйге лагерының эшмәкәрлеген өлгө итеп ҡуйҙы. Был проект балаларға милли рух мөхитендә ял итергә, туған телендә аралашырға, башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын өйрәнергә булышлыҡ итә. Ә был йәш кешенең шәхес булып формалашыуына ыңғай йоғонто яһай. Тик был лагерь республикала берҙән-бер һәм йәйен бер тапҡыр ғына эшләй, унда теләгән бар бала эләгә алмай. Уны йыл әйләнәһенә эшләй торған проектҡа әйләндереү зарур. Был бик күп ата-әсәләрҙең яҡты хыялы.

Балаларҙың рухи сәләмәтлеге, тәрбиәһе темаһын дауам итеп, "Тамыр" телеканалы етәксеһе **Гөлназ Ҡолһарина:** "Тамыр"ҙың тапшырыуҙары, башлыса, ауыл балаларына йүнәлтелгән. Былтырҙан башлап был эшмәкәрлек тағы ла киңәйтелде һәм "Тамыр"ҙар ауылдарға ла сыға башланы. Мәҫәлән, былтыр Әлшәй районы Ташлы ауылы балалары ғына түгел, ә ололары ла Өфө ҡунаҡтары әҙерләп алып килгән байрам программаһын ихлас ҡабул итте. Шулай уҡ 20 йыл рәттән барған "Сулпылар" конкурсына ла хәҙер ауыл балаларын күберәк йәлеп итеү өсөн тырышабыҙ. Быны өсөн республика райондары буйлап йөрөп, конкурста ҡатнашырға теләге булған һәр баланың сығышын ҡарап, һайлап алыу турҙары үткәрәбеҙ һәм Өфөлә сығыш яһау мөмкинлеге бүләк итәбеҙ. "Тамыр" тапшырыуҙарын республикала ғына түгел, ә халыҡ-ара конкурстарҙа ла көтөп алалар һәм яратып ҡарайҙар. Ғөмүмән, был юҫыҡта телеканал оло эш башҡара, сөнки республика балаларының тауышынситтә ишеттереү, уларҙың талантын һәм маһирлығын күрһәтеү мөһим. Халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнашыу балаларға үҙҙәрен күрһәтергә, ә сит төбәктәрҙә һәм илдәрҙә башҡорт милләте хаҡында яҡшы фекер төйнәргә булышлыҡ итә. Беҙҙең башҡорт балаларына һәр ерҙә лә һоҡланып ҡарайҙар, тел байлығына аптырайҙар. Ысынлап та, уларҙа ниндәйҙер нур, матурлыҡ бар. Үҙебеҙ гел генә ошо матурлыҡ эсендә йөрөгәс, уның араһында булғас, уны күрмәйбеҙ һәм һиҙмәйбеҙ, ә сит кешеләр быны тиҙ үк тотоп ала", - тип белдерҙе.

Артабан ҡорҙа ҡатнашыусылар бөгөнгө көндә башҡорт ауылдарына күплап сит милләт кешеләренең күсеп килеүе йышайыуы айҡанлы хәүеф белдерҙе.

- Быға юл ҡуймаҫ өсөн һәр кем үҙенең тыуған ауылында ер алып, өй һалһа, яҡшы булыр ине, - тине комиссия рәйесе. - Әлбиттә, быны талап итеп булмай, сөнки өй һалырға ла, Мәрйәм апай һымаҡ, ниндәйҙер эш урындары булдырырға ла һәр кемдең мөмкинлеге юҡ. Ә шулай ҙа беҙ, ауылда үҫеп, хәҙерге ваҡытта ҡалала йәшәгәндәр, тыуған ауылдарыбыҙҙы онотмай, мөмкинлек булғанда ҡайтып, унда ситтән килеп төпләнергә маташыусы, хатта үҙ талаптарын көсләп тағырға маташыусыларға был ауыл халҡының Өфөлә яҡлаусылары бар икәнлеген белдерә йөрөргә тейешбеҙҙер. Ауылда даими йәшәмәһәк тә, унда ҡайтып, күҙ-ҡолаҡ була йөрөйөк, тимәксемен...

"Салют" санаторийы директоры **Нәйлә Усманова** әйтеүенсә, был эште уның ауылдаштары башлаған да инде һәм Күгәрсен районы Бөркөт ауылында бәләкәй булһа ла өйҙәр төҙөп, йәй көндәре булһа ла ҡайтып, шунда йәшәйҙәр икән. Һәр хәлдә, беҙ ауыл аҙмышына ҡул һелтәп ҡарамайбыҙ һәм ауылыбыҙҙа тормош бөтөнләй һүрелмәһен өсөн эштәр алып барабыҙ, тип белдерҙе ул.

Шағирә, "Аҡбуҙат" журналының баш мөхәррире **Тамара Юлдашева** ла ауыл аҙмышы өсөн хәүефләнеүен йәшермәне. "Ҡалаларға таралышып бөткәнбеҙ ҙә, ауылдарыбыҙҙы ташлағанбыҙ икән дә ул, - тине ул әсенеп. - Ысынында, халыҡ беҙҙән ярҙам өмөт итә, кәңәш көтә. Әле яңыраҡ Башҡортостан юлдаш телевидениеһы "Ҡайтайым ауылыма" тигән тапшырыуҙы минең ауылымда ла төшөрҙө. Был ваҡиғаны шул тиклем ололаны ауылдаштарым, шул тиклем күңелдәре булды. Шуға күрә, әйҙәгеҙ, ауылдарыбыҙҙы йәнләндереүгә, йәштәүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индерәйек!"

"Ауылды ауыл итеүсе - унда йәшәгән халыҡ, - тип һүҙгә ҡушылды 2-се Республика клиник дауаханаһы баш табибы урынбаҫары **Рәшиҙә Йосопова**. - Әммә ауыл халҡының үҙ һаулығына битарафлығы хәүефкә һала. Шуға күрә, ауылдарға осрашыуҙарға сыҡҡанда һаулыҡҡа ҡағылышлы һорауҙарға яуаптар биреү, аңлатыу эштәре алып барыу бик мөһим". Рәшиҙә Мөхәмәт ҡыҙы шулай уҡ ауыл йәштәре араһында ғы үҙ-үҙенә ҡул һалыу, эскелек күренештәренең артыуына борсолоуын белдерҙе һәм ошо юҫыҡта аныҡ эштәр атҡарыу кәрәклеген билдәләне.

Эшлекле һәм фәһемле һөйләшеүҙә шулай уҡ халыҡты юридик яҡтан яҡлаулы итеү, башҡорттарҙы сит төбәктәрҙә генә түгел, ә донъя кимәлендә күрһәтеү һәм танытыу мәсьәләләре лә күтәрелде. Быларҙың барыһын да тормошҡа ашырырға мөмкин, тигән һығымта яһаны комиссия ултырышында ҡатнашыусылар, быны өсөн һәр кемдең үҙ милләте, республикаһы, туған теле өсөн нимәлер булһа ла эшләү теләге булыуы ғына шарт. Бөгөнгө заман, әленән-әле ҡабатланып торған һынауҙар теләктәрҙе кисекмәҫтән тормошҡа ашырырға мәжбүр итә. Заман ҡанунына күнмәйһең икән, һин йә барһың, йә -юҡһың...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан бөгөн һәр район, ҡала һәм ауылда аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр ҡорҙары булдырыу маҡсаты ҡуйыла. Йолаларыбыҙҙы тергеҙеү, ир менән ҡатын бурыстары, бала тәрбиәләү буйынса халыҡ тәрбиәһе нигеҙҙәрен аяҡҡа баҫтырыу, башҡорт ғаиләһе статусын күтәреү кеүек тәүбурыстарҙы хәл итеүҙә тап ошо ҡорҙар ағзалары үҙ иңенә ныҡлап йөкмәргә, ә ҡалаға яҡташтар уларға ярҙам итергә тейеш. Ошондай саҡырыу еткерелдә әлеге комиссия ултырышында ҡатнашыусы зыялы ҡатын-ҡыҙҙар адресына ла.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**



Комиссия ултырышында ҡатнашыусылар.

✓ *Төн уртаһы яҡынлашҡайны. Аралбай ауылын үткәс, бәләкәй ағас күпер алдында беҙҙең колонна туҡтап ҡалды. Алда, юлды быуып, фаралар яҡтыһында ап-аҡ булып ғәжәп ҙур кеше баҫып тора. Буйы өс метр самаһы барҙыр.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СПОРТ МЕНӘН...

## ир-ат күберәк шөғөлләнә

■ Ҡолаҡсындар ишетеү һәләтен түбәнәйтә, тип яҙа News.am һәм миҫал итеп Эребрулағы университет дауаханаһының аудиология клиникаһы профессоры Клас Меллер һүҙҙәрен килтерә: "Беҙ насар ишетеүсе тотош быуын үҫеп килеүен аңларға тейешбеҙ. Был проблема улар ҡартайғанға тиклем үк барлыҡҡа киләсәк". Быны раҫлап, Меллер мәктәп уҡыусылары менән үткәрелгән һынауҙарҙың һөҙөмтәһен күрһәтә. Даими рәүештә плеерҙан музыка тыңлау сәбәпле, 400 баланың 3 проценты ҡолағында шау барлыҡҡа килеүен билдәләгән. Уларҙың проценты ҙур булмаған кеүек тойолһа ла, Меллер фекеренсә, был балаларҙың йәше хәүефләнергә урын ҡалдыра. Эске ҡолаҡҡа йүнәлтелгән тауыш ни тиклем көслөрәк була, шул тиклем насарыраҡ, был тауыштың ҡолаҡ тишегенә ҡуйылған аппараттан килеүе тағы ла ҙурыраҡ ҡурҡыныс тыуҙыра.

■ Бөтөн Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге яңы һорау алыу үткәргән һәм рәсәйлеләрҙең үҙ сәләмәтлегенә ниндәй мөнәсәбәттә булыуын асыҡларға тырышҡан. Яуап биреүселәрҙең 84 проценты үҙенең тәненә һаҡсыл ҡарауын белдергән. Һаҡсыл ҡарау, тигәнде нисек аңлайһығыҙ, тигән һорауға уларҙың 38 проценты табипҡа йөрөүҙәре һәм уларҙың кәңәштәрен тотоуҙары, 36 проценты насар ғәҙәттәре булмауы, ҡалған бер өлөшө телевизорҙан сәләмәтлек тураһында тапшырыуҙар ҡарауы тураһында белдергән. Яуап биреүселәрҙең дүрттән бер өлөшө йыл һайын диспансерлаштырыу үтә. 22 процент рәсәйле йылына бер тапҡыр булһа ла яҡшы итеп ял итә, ә һәр бишенсе рәсәйле физкультура һәм спорт менән шөғөлләнә. Шул уҡ ваҡытта, дөрөҫ туҡланыуҙы сәләмәт булыуҙың бер сараһы икәнен 25 процент ҡына рәсәйле таныған. 8 процент яуап биреүсе витаминдар һәм биологик аҙыҡ өҫтәмәләре ҡабул итә. 15 процент рәсәйле һаулығы тураһында бөтөнләй хәстәрлек күрмәй. Ҡатын-ҡыҙҙар үҙ сәләмәтлегенә иғтибарлыраҡ, ирҙәр иһә спорт менән йышыраҡ шөғөлләнә.

■ Америка табиптары иҫкәртә: күп ҡулланһаң, хатта иң файҙалы ризыҡтар ҙа организмға зыян килтерә ала. Мәҫәлән, кишер һуты башҡа йәшелсә һуттарынан тәме буйынса айырылып тора, шуға ла Небраска университеты ғалимдары уны ашҡаҙан аҫты биҙе, эсәк сирҙәре мәлендә эсмәҫкә кәңәш итә. Баҡтиһәң, кишерҙә шәкәрҙең төрлө төрҙәре бар икән, айырыуса шәкәр диабеты сирлеләренә кишер ашау тыйыла. Кишер һутын йыш эскән саҡта ашҡаҙан аҫты биҙенә өҫтәмә көсөргәнеш була. Ҡайһы саҡта был һут яҡшыраҡ үҙләштерелһен өсөн, уға һөт өҫтө өҫтәйҙәр, әммә бында ла сама белергә кәрәк. Быларҙан тыш, кишерҙәге бета-каротин йөҙҙөң төҫөн үҙгәртеүе ихтимал. Шуға ла был һутты аҙнаһына бер тапҡыр эсеү ҙә етә.

■ Фастфуд менән артыҡ мауығыу балаларҙа астма һәм экзема сирҙәренең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был ризыҡтарҙағы зарарлы матдәләр ауыр формалағы астманың барлыҡҡа килеү хәүефен үҫмерҙәр араһында - 38, ә 6-7 йәшлек балалар араһында 27 процентҡа күтәрә. Ул шулай уҡ экзема һәм риниттың сәбәпсеһе булып тора. Фастфудты емеш-еләк, балыҡ, ҡуҙаҡлылар менән алыштырыу уның әҙемтәләрен кәметеүгә һәм был сирҙәрҙе иҫкәртеүгә булышлыҡ итә, ти Австралияның Аделаида университеты ғалимдары.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ДОНЪЯҺЫ

# АЛПАМЫШАЛАР ЭҘЕ...

## Бөрйәндә лә һаҡлана



**"Киске Өфө" гәзитенең 2006 йылдың август айы һандарында йөҙәр генә түгел, меңәр йылдар буйына кешелектең серен һаҡлап килгән атлант-алпамышалар тураһында яҙылып сыҡҡайны. Һүҙ был заттың төрлө ваҡыттарҙа Бөрйән урмандарында кешеләр менән осрашыуы тураһында барҙы. Былтыр алпамыша тағы ла үҙенең барлығын белдерҙе.**

### Изге китаптар нимә һөйләй?

Библияла ғәҙәттән тыш көскә эйә булған алпамышалар рефаимдар, тип телгә алына: "Алла улдары" рефаимдар кеше ҡыҙҙарының матур икәнлеген күреп, үҙҙәренә ҡатынлыҡҡа алдылар. Ошо никахтан рефаим-алпамышалар нәҫеле барлыҡҡа килде. Туфан һыуы ҡалҡҡас, улар үлделәр, әммә йәндәре ер йөҙөндә йөрөй".

Беҙҙең эраға тиклем VIII быуатта йәшәгән Исаия бәйғәмбәр (Иса йәки Ғайса бәйғәмбәр менән бутарға ярамай) китабының 26-сы бүлегендә, Хоҙайға мөрәжәғәтендә түбәндәгеләрҙе яҙа: "Үлектәр терелмәй, рефаимдар аяҡҡа баҫмай. Сөнки һин уларҙы күрҙең һәм ҡырҙың, улар тураһында хәтерҙе лә юҡ иттең". Һуңғы рефаимдар Муса, Дауыт бәйғәмбәрҙәр ваҡытында ла осрай.

Ҡөрьәндең Һуд, Шағирҙар, Ҡомдар, Ай, Ҡиәмәт көнө сүрәләрендә Ғәрәбстан ярымутрауының көньяғында йәшәгән ҡеүәтле ад ҡәүеме кешеләренең яҙмышы бәйән ителә. Поттарға табынып, төрлө гонаһтарға, енси бәйелһеҙлек, аҙғынлыҡҡа бирелгән ад халҡын Һуд бәйғәмбәр иманға килергә, Алланы танырға саҡыра. Мәгәр үҙ көстәренә ышанған тәкәббер алпмышалар уның һүҙен ҡолаҡҡа элмәй. Оҙаҡ көттөрмәй, Хоҙай уларға башта ҡоролоҡ, аҙаҡтан көслө ҡом бураны ебәрә. Адиттар ете төн, һигеҙ көн буйы барған һалҡын ел, ҡом бураны аҫтында һәләк була. Уларҙың ҡасандыр сәскә атҡан иле сүллеккә әүерелә. Был әфәттән Һуд һәм уға эйәргән алпамышаларҙың бәләкәй төркөмө генә ҡотолоп ҡала.

Боронғо Һинд Ведаларында ла аллалар тоҡомонан булған, кеше ҡиәфәтендәге великан-адитьялар, дайттар, данавалар хаҡында бәйән ителә. Улар аҡыллы, хәйләкәр, ҡиәфәттәрен үҙгәртә, төрлө хайуандарға әүерелә алалар, күҙгә күренмәү һәләтенә эйәләр. Был ҡәүемдәрҙә фән, сәнғәт, сәнәғәт алға киткән була. Күп һанлы, төрлө типтағы ҡояш, ер, ай, һыу энергияһы ярҙамында һәм башҡа яғыулыҡтар файҙаланып осоусы "виман", "агнихотр" тип аталған аппараттар төҙөйҙәр. Хәрәкәт итеүсе "уй тиҙлегенә" еткән ошо аппараттарында улар һыу аҫтында ла йөҙәләр, ер шары атмосфераһында һәм хатта икенсе галактикаларға осалар. Үрҙә әйтелгән ҡәүемдәр үҙ-ара һуғыш барышында бөтә нәмәне иреткән, яҙмаларҙа һүрәтләнеүе буйынса, ядро ҡоралын ныҡ хәтерләткән ҡорал ярҙамында бер-береһен ҡырып бөтөргән.

### Боронғо шаһиттар яҙмаларынан

Беҙҙең эра башында, йәғни ике мең йылдар элек йәһүд һәм рим тарихсыһы Иосиф Флавит: "Кәүҙәләре бик ҙур ине, йөҙҙәре ябай кешенекенән айырыла. Һөйләшеүҙәрен тыңлауы ҡурҡыныс, тауыштары күк күкрәүе менән бер",- тип яҙа.

"Алпамышаға ҡарау менән сабый үлә, йөклө ҡатындың балаһы төшә", - тип яҙа 922 йылда башҡорт ере аша Булғар батшалығына сәйәхәт ҡылған Әхмәт ибн Фаҙлан.

XII быуат башында башҡорт, булғар ерҙәре аша үткән икенсе ғәрәп сәйәхәтсеһе Әбү Хәмит Әл-Ғарнати башҡорт илендә ад ҡабиләһе кешеләренең күп ҡәберлектәрен күреүен билдәләп үтә: "Мин булғарҙа ад ҡәбиләһенән Данки исемле кешене күрҙем. Мин уның биленән генә инем. Кешеләр уны күрһә, ҡурҡып ҡаса. Шуға ҡарамаҫтан, ул кешелекле, ғәҙел, тоғро һәм тыныс ине".

1520 йылдарҙа Ер шары тирәләй сәйәхәтендә Ф.Магеллан караптары Көньяҡ Америкала, хәҙерге Аргентина ярҙарында туҡтап китә. Был территорияны бөйөк сәйәхәтсе "Патагония" тип атай. "Патагонец" португал телендә "ҙур аяҡ" тигәнде аңлата. Сәбәбе - сәйәхәтселәр яр буйында гигант кешеләрҙе осрата. Экспедиция ағзаһы А. Пигафетта уларҙы былай тип һүрәтләп яҙа.: "Беҙҙең иң оҙон буйлылар уның биленән генә ине. Мөһабәт кәүҙәле, ҡыҙыл буяу менән буялған ҙур битле. Ҡулында уҡ-ян, уҡ башаҡтары таштан... Алдашмайым, великандар аттан шәберәк йүгерә, ҡатын-ҡыҙҙарына яҡынлашҡанды яратмайҙар. Ҙур, ауыр таштарҙы алыҫҡа, мәргән бәрәләр. Тауыштары буйвол тауышы кеүек".

Магелландан һуң Патагонияла туҡтап киткән атаҡлы пират, адмирал Френсис Дрейк һәм башҡа диңгеҙселәр ҙә великандар күреүҙәрен хәбәр итәләр.

Һуңғы сығанаҡтар буйынса, атланттарҙы 200 йылдар элек Австралия ярҙарында күрәләр. Башҡа был ҡеүәтле ҡәүем, раса кешеләре тураһында хәбәрнамәләр юҡ.

### Һуңғы шаһиттар һөйләүенән

- Әгәр мин бер үҙем күрһәм, миңә бер кем дә ышанмаҫ, Юрий, һинең менән "белая горячка"булғандыр, тип көлөрҙәр ине. Беренсенән, мин эсмәйем, икенсенән, минән башҡа тағы ла унлап кеше бар ине. Улар шаһит, - тип һөйләй Иҫке Собханғол ауылы ауылында йәшәүсе пенсионер Евстигнеев Юрий Серафим улы.

- 1972 йылдың декабрендә Белорет базаһынан районға машиналар менән аҙыҡ-түлек алып ҡайтып киләбеҙ. Төн уртаһы яҡынлашҡайны. Аралбай ауылын үткәс, бәләкәй ағас күпер алдында беҙҙең колонна туҡтап ҡалды. Алда, юлды быуып, фаралар яҡтыһында ап-аҡ булып ғәжәп ҙур кеше баҫып тора. Буйы өс метр самаһы барҙыр. Аҡ сал сәстәре ялбырап яурынына, ҡуйы һаҡалы күкрәгенә төшкән, яланаяҡ, өҫтөнә аҡ халат кеүек нимәлер кейгән, бик мөһабәт, матур кәүҙәле бабай ине. Үҙе тауыш- фәлән сығармай. Яңғыҙ булһам, ҡотом осоп үлер инем. Алпамыша күперҙән үтергә тырышҡан "Урал", "ЗИЛ" машиналарын ҡулдары менән еңел генә күпер ситенә шылдыра, йә артҡа этәрә. Ҡайҙан унда шул тиклем көс? Бына мөғжизә! Ул шулай беҙҙе ярты сәғәт самаһы үткәрмәй торҙо. Был ысын кеше ине. Бик ҙур кеше. Бергә йыйылып һөйләшеп, уға ҡаршы сығырға булдыҡ. Егеттәр балта, көрәктәр менән ҡоралланып, алпамышаның алдына сыҡты. Беҙ уның биле тирәһенән булғанбыҙҙыр. Теге һаман ҡуҙғалмай тора бирә. Мин паяльный лампаны ҡабыҙып, утын ныҡ ҡына асып ебәрҙем. Лампанан бөркөп торған утты күргәс, алпамыша юҡ булды. Уттан ҡурҡты, буғай. Былай алышҡанда ул беҙҙе тапар ине. Беҙҙең дә ҡурҡыу шул тиклем көслө булғандыр, машиналарға ултырып, артҡа ла ҡарамай ҡыуабыҙ ғына...

- Юрий ағай, алпамышаның барлығына ышанмаған кешеләр ҙә бар бит...

- Шул ышанмаған кеше беҙҙең менән булһа, ыштанын бысратып ҡайтыр ине, әлбиттә. Икенсе көнөнә алпамышаның эҙҙәрен барып күрҙек. Эҙҙәр ҙур, табаны 40 см тирәһе булыр...

1975 йылдарҙа, бесән осоронда, Юрий Евстигнеев ағай алпамыша менән тағы осраша.

- "Урал" машинаһы менән Йылайыр районы сигенә, Бастан тигән ергә бесән алып ҡайтырға барҙыҡ. Бесәнде тейәй ҙә башламаныҡ, ҡайҙандыр теге бабай килеп сыҡты бит. Дүрт кеше инек, ҡурҡыштан кабинаға инеп бикләндек. Алпамыша алдан килеп, машинаны ике ҡулы менән ҡосаҡлап, дер һелкетә башланы. Ҡулдары шул тиклем ҙур, ағас ботаҡтары кеүек. Бер иптәштең ҡушкөбәк мылтығы бар ине. "Атайым мин уны", - ти. "Уйлама ла, үҙеңде лә, беҙҙе лә һәләк итерһең", - тим уға. Артҡа сигенеп, тегенән ҡасып ҡотолдоҡ.

**Заһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Йылдар үтеү менән дә һеҙ физик көсөгөҙҙө лә, рухи көсөгөҙҙө лә юғалтырға тейеш түгелһегеҙ. Һеҙгә нисә йәш булыуы мөһим түгел, һәр саҡ физик формала ҡалығыҙ һәм тормошҡа булған дәртегеҙ һүрелмәһен.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*

# ХӘРЕФ-ӨНДӘР АТАМАҺЫ ҺӘМ...

## һандар хикмәте

Һан да, хәреф тә донъя яратылыуының серҙәрен туплаған, йөкмәткеһенә гармоник мөнәсәбәттәрҙең тәрәнлеген йыйған, ритмын билдәләгән оло йөрәкле билдә, тамға. Ул дүрт һандың - 1, 2, 3, 4 һандарының ҡушылмаһын үҙ эсенә ала. Сөнки тап ошо дүрт һандың мөнәсәбәт нигеҙҙәре, принциптары донъя менән идара итә. Хәрефтәре менән улар: Алеф (1), Бэт (2), Гимел (3) һәм Далет (4) тип йөрөтөлә.

Аб - боронғо заманда беҙҙең телдә "һыу"ҙы белдереп килгән, мәҫәлән, абелхаят - тереклек һыуы, абруй - йөҙ һыуы, ә йәһүд телендә аб - "атай" тигән һүҙҙе белдерә. Аг- ижеге бик бөйөк йөкмәткегә эйә булып, Каббалала әйтелеүе буйынса, мәғәнәһе бик йәшерен булған "Агла" һүҙен барлыҡҡа килтерә. "Ау" һүҙе өстө өскә ҡушҡандан барлыҡҡа килгән ижек = а+у (уау) (1+6 һаны), ул ҡобайырҙарҙа бик йыш ҡулланыла һәм шулай уҡ киң эзотерик мәғәнәгә эйә. Гармония һәм матурлыҡ символын үҙ эсенә алған 6 һаны һәм "у" хәрефенең йөкмәткеһе Ер донъяһын "күҙ-ҡолаҡ" аша ишетеп-күреп таныуға ишара яһай, тәбиғәт менән берлекте, гармоник мөнәсәбәтте һыҙыҡ өҫтөнә ала. Ә дүрт һаны, хәрефе д (далет) булған һан, донъяның дүрт тарафын символлаштыра. Был дүрт тарафлы донъяла бар нәмә "йуд" хәрефенең тағы бер символы булған ҡул ярҙамында барлыҡҡа килтерелә, уй-фекерҙәр, хыялдар ҡул ярҙамында ысынбарлыҡҡа әйләнә, кеше ҡулының көсө, уңғанлығы бар донъяны биҙәй, тәртипте контролдә тота.

Шуға күрә был 10 һаны һәм "йуд" хәрефенең эзотерик мәғәнәһе лә кеше яҙмышы менән бәйле - "тәҡдир". Аллаһы Тәғәлә биргән яҙмыш. Грек телендәге "и" хәрефенең "йота" атамаһы ла "яҙмыш" тигәнде аңлата. Һан булараҡ йәһүд телендәге исеме - "эссер", йәғни "бар нәмә" (всё). Ошо атаманы ике ижеккә бүлеп әйтһәң, башҡорт телендәге һәр кемгә лә таныш һүҙ килеп сыға. "Эс серендә ятҡа һөйләмә" тиҙәр, йәғни, барыһын да һөйләп бармa. Хәреф планетаһы яғынан Ҡыҙ йондоҙлоғона ҡарай. Ҡыҙ йондоҙлоғо һул яҡ, йәғни ғәмәли эш менән аҡылды ҡушып эшләүҙе белдерә. Беҙ, башҡорттар ҙа, һул ҡул кешеләре, беҙҙе юҡҡа ғына төньяҡ, шимал төрөктәре, тип йөрөтмәйҙәрҙер. Урал исемендә лә һул ҡул принцибы төҫмөрләнә. Ошонда "и" хәрефенең тағы башҡорттоң бер боронғо орнаменты - әүернә (свастика) менән бәйләлеген әйтеп китеү ҙә урынлы булыр. Бәхет асҡысы булған был орнаментта Йыһан яратылыу тураһындағы нигеҙ ғилемдәренән тыш, башҡорт теле һуҙынҡыларының бар мәғәнәүи йөкмәткеһе йәшеренгән. Бында ла "и" һуҙынҡыһы кешенең эске донъяһының үҙәк көсө. Ике донъя - матди һәм рухи донъяны, тәбиғәт көстәренән ер-һыу, ут-һауаны тоташтырып торған илаһи көстө билдәләй.

Кешенең эске донъяһының үҙәге, үҙәк тотҡаһы ул "и" һуҙынҡыһы. Ун һаның ябай һанға әйләндерһәң, 1 һаны килеп сыға. Исеме "алеф", "Ахад", йәғни, Йыһандағы һәр нәмәнең башланғыһын, берлеген белдергән һан һәм хәреф.

"А" менән "и" өнөн ҡушып әйтһәң, "ай" һүҙе килеп сыға. Һаны 10+1=11. Ябай һанға әйләндерһәң - 2. Ай - тыуыу, тыуҙырыу, ижад итеү, гармония тигән мәғәнәләрҙе үҙ эсенә алған. 2 һаны, йоп һан булараҡ, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙ принцибы менән бәйле. Ә исеме буйынса "бэт" - "өй", "йорт" тигәнде аңлата. Әйтелеше төрлөсә: бет, бейт, баит, бәйтел (ғәрәп телендә), ә башҡорт телендә "бәйет" тип, ике юллыҡ шиғыр атамаһына әйләнеп киткән. Өй сикләнгән киңлек булып, сит-яттарҙан, яман көстәрҙән һаҡланыу урыны. Өй шулай уҡ тәртип, төҙөлөш, артыу, үрсеү менән дә бәйле. Хәрефтең планетаһы булған Сатурн (хиромантияла урта бармаҡ) һәр төрлө байлыҡ туплауҙы, тәртипте, тормоштоң юғары закон-ҡанундарын һаҡлаусы, яҡлаусы планета. Тик Сатурндың кире яҡтары ла бар, ул сикләнгәнлеккә, эгоизмға, ҡомһоҙлоҡҡа килтереүе ихтимал.

Өсөнсө яҡтан ҡарағанда, "б" хәрефе уйлап эш итеүҙе, бер-береңде аңларға тырышыуҙы, теләктәшлекте символлаштыра. Сөнки өйҙә, ғаиләлә, йәмғиәт йортонда бер-береңде аңларға тырышыу ғына киләсәкте күҙалларға ярҙам итә. Ә инде киләсәкте тоҫмаллай белеү үҙ сиратында йорт-ғаилә байлығын, хәл-торошон яҡлау, һаҡлау тигән һүҙ. 1 менән 2-не ҡушһаң, өс килеп сыға (10+2=1+2=3). 3 һаны әүҙемлек, эшхәрәкәт менән бәйле хәреф - "г"-ға тура килә, тулы исеме "гимел", беҙҙең телдә әйтелеше ғәмәл. Гимел "дөйә" тигәнде аңлата. Тәбиғи сифаттар буйынса түҙемлек, сабырлыҡ, сыҙамлыҡ, эске көсө ярҙамында йәшәүгә яраҡһыҙ аракиңлектәрҙе лә арымай-талмай үтә алған дөйә атамаһынан алынған хәреф исеме менән гармоник бәйләнештә символлаштыра. Әүҙемлек һәм "хәрәкәттә - бәрәкәт". Хәрефтең төп мәғәнәһе лә "тәбиғәт". Тәбиғәттәге барлыҡ закондар ҙа, бер-берең менән гармоник бәйләнештә әүҙем хәрәкәт итеүгә ҡоролған. Ләкин донъяла ҡайһы саҡта салыш-солош (шалыш-шолош) күренештәр ҙә осрап тора. Был һандың исеме беҙҙең башҡорт телендә шулай дисгармоник биҙәк алып киткән. Йәһүдтәрҙә 3 һанының исеме "шалош", йәғни, триада. Астрологик яҡтан шулай уҡ Ҡыҙ йондоҙлоғо менән бәйле. Юпитер менән дә бәйләнеше бар. Талмудта Ибраһим атаның планетаһы Юпитер (Цедек) булған, тип әйтелә. Ә Ибраһим ата был планетаға хас сифат - шәфҡәт һәм миһырбанлыҡҡа эйә, ошонан сығып г-ның, гимелдең дә бер мәғәнәһе - шәфҡәт һәм мәрхәмәтлек.

**Гөлфирә ҠОТЛОМӨХӘМӘТОВА.**

**(Дауамы. Башы 3-4-се һандарҙа).**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Вегетарианлыҡҡа тиклем… тән тиресәһенең торошо

Бөгөн тәнемдең туҡланыуҙа ит, балыҡ, йомортҡа ҡулланыуҙан тыйылыу тураһында нәҙер әйткәнгә тиклем һәм унан һуңғы торошон сағыштырыу мөмкинлегем бар. Мин һәр саҡ тулы кәүҙәле, һимерергә генә торған малай булдым. Йылдар үтеү менән был үҙен нығыраҡ һиҙҙерә башланы. 16 йәшемдә кендегемде "юғалттым". Ул ҡайҙалыр эсемдә тороп ҡалды, уны күҙ ҡарашы менән күреп булмай ине. Бәпес бармағым кендек тигән тишеккә икенсе быуынына тиклем инеп китә торғайны. Эс тирәһендә он тултырылған тоҡҡа оҡшаған нимәләр барлыҡҡа килде. "Тоҡ" һәр саҡ алға сығып, йылдар үтеү менән ҡайыштағы тишектәрҙе ҙурайтырға мәжбүр итте. Ашауға талымһыҙ булған "яҡшы" йылдарҙа буйым 169 сантиметр булһа ла, ауырлығым 79 килограмға етте. Күрәһең, мин 30 йыл дауамында үҙемдең нормалағы ауырлығыма (хәҙер 70 килограммын) өҫтәп, бер биҙрә һыу ауырлығындағы ауырлыҡты күтәреп йөрөткәнмен. Май ҡатламдары нигеҙҙә эс һәм янбаш тирәһендә туплана ине. Һәр саҡ кендегемдән умыртҡа һөйәгенә тиклем ниндәйҙер түңәрәк, уңайһыҙ нимәләр булыуын даими һиҙҙем. Ул тере булмаған ниндәйҙер үле зона булып торҙо. Ауырыуҙарҙың сығанағы тап шунда кеүек тойола ине.

Хатта еңел генә физик эш тә йөрәгемде юғары ритмда тибергә мәжбүр итте. Йәйгеһен тиҙ тирләнем, даими һыуһаным. Мөмкин булған барлыҡ шыйыҡлыҡты эстем, әммә һыуһыным ҡанманы. Бигерәк тә маңлайым һәм умыртҡа һөйәгенең ҡоймостан (копчиктан) саҡ ҡына юғарыраҡ өлөшө ныҡ тирләне. Кеше күп булған автобуста шунда уҡ тотош тәнем манма тир булды. Минән даими рәүештә мин итен ашаған хайуандарҙың еҫе сыға ине. Йөҙөмдөң тиреһе бөләкәйләтелгән варианттағы матрасты хәтерләтте. Тире аҫтында - хайуан майы ҡатламы. Улар тышҡа сыҡмаһын өсөн бит тиреһе күҙәнәктәр барлыҡҡа килтергән төймә менән "тегеп" ҡуйылған. Битем ҡытыршы, шешмәк. Иртән йыуынғанда устарымдың тире менән тарттырылған үле май өҫтөнән йөрөгәнен тоя инем.

Иммунитетым бик көсһөҙ. Аҙнаһына бер тапҡыр, бигерәк тә итле ризыҡтарҙы күп ашағандан һуң, тирем осона торғайны. Иртән улар ауыртып торған ҡаты төйөр булараҡ сыҡһа, көн үҙәгендә һыу менән тулышып, кискеһен инде ҡанһырап тороусы яраға әйләнде. Дарыуҙар ярҙамында уларҙан ҡотолорға тырышыу һөҙөмтә бирмәне. Бындай осраҡта халыҡ дауаһы ла килешмәне. Ҡайһы бер сығанаҡтары ете-һигеҙ көн дауамында эренләп йөрөнө. Температураның саҡ ҡына үҙгәреүе лә минең организмымда сағылыш таба торғайны. Ямғыр аҫтында ҡалһам - шунда уҡ тымау башлана. Саҡ ҡына үтә ел булдымы - температура күтәрелә. Бер йотом һалҡын һыу эстемме - тамаҡ ауырта башлай. Бынан һуң йыш ҡына хроник ҡурылдай өйәнәге башлана. Һуҡыр эсәк өйәнәге булғанда миңә 30 йәш тә юҡ ине әле. Медучилище ҡыҙҙары төркөмө ҡамауында операция эшләгән хирург һуҡыр эсәгемде илтифатһыҙ ғына ҡырҡты. Ул, бәлки, ҡыҙҙар алдында үҙен күрһәткеһе килгәндер, ә мин уның тәртипһеҙ ғәмәлдәре һөҙөмтәһендә ныҡ ауыртыныу кисерҙем. Урындағы наркоз аҫтында булғас, хирургтың һәр хәрәкәтен күҙәтеп яттым, ләкин тороп, физиономияһына ҡундырыу мөмкинлегем генә юҡ ине. Ул ваҡытта, әлбиттә, операция өҫтәленә табиб ғәйебе менән түгел, үҙемдең наҙанлығым арҡаһында эләгеүемде аңламай инем әле.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

47. Деннис Хоулиҙың "Обнаруживая счастье" тип аталған китабын уҡығыҙ. Ул һеҙгә яҡшы сәләмәтлектең һәм бәхетле булыуҙың яңы офоғон, яңы перспективаларын асыр.

48. Иғтибарығыҙҙы туплауҙы күтәреү һәм хәтерегеҙҙе яҡшыртыу өсөн ваҡыты-ваҡыты менән таныш булмаған китаптан берәр абзац уҡығыҙ. Һуңынан уны үҙегеҙҙең һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп бирергә тырышығыҙ. Был күнекмәне көнөнә биш минут булһа ла башҡарығыҙ. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәҫ, бер нисә ай күнекмәнән һуң мотлаҡ килер.

49. Үҙегеҙҙе тәүҙә - 5, һуңынан 10 саҡырымға йүгереүҙә һынап ҡарағыҙ. Йүгереү менән шөғөлләнгән бер нисә йөҙ кеше араһында булыу тойғоһонан ҡанығыҙҙа барлыҡҡа килгән адреналин дәртләндерер һәм башығыҙҙы әйләндерер. Физик мөмкинлектәрегеҙ спектрын киңәйтә барып, һеҙ ҡеүәтегеҙҙе арттырырһығыҙ. Тәнегеҙҙән нимә һораһағыҙ шуны ғына бирә икәнен онотмағыҙ.

50. Тәмле еҫтәр көсөргәнештән арыныуҙың (релаксация) һөҙөмтәле ысулы булып тора. Улар беҙҙең кәйефкә лә һиҙелерлек йоғонто яһай. Үҙегеҙгә кәрәкле хуш еҫ биреүсе майҙарҙы һатып алығыҙ. Уларҙың бер нисә тамсыһын ҡайнап торған һыу һалынған һауытҡа тамыҙығыҙ һәм бер нисә минут буйы шул татлы һауаны һулағыҙ. Һуңынан ошо еҫтәр ҡатнашмаһын үҙегеҙ ял итергә ғәҙәтләнгән бүлмәлә ҡалдырығыҙ. Тыныслыҡ, ял тойғоһо һеҙҙе шунда уҡ ялмап алыр. Ғалимдар раҫлауынса, һауалағы еңелсә алма еҫе йоҡо тыныслығын тәьмин итә.

51. Киске аштан һуң көн һайын ярты сәғәт саф һауала йөрөүҙе ғәҙәт итеп алығыҙ. Тәбиғәттә йөрөү бигерәк тә файҙалы. Атлау, хәрәкәтләнеү иң идеаль тәбиғи күнекмә булып тора. Ял итеп йөрөү ваҡытында эш тураһында ла, төрлө иҫәп ҡағыҙҙарын да, алдығыҙҙа торған проблемаларҙы ла уйламағыҙ - уларҙы уйлаһағыҙ, ялдың барлыҡ ләззәтен юғалтасаҡһығыҙ. Бары тик ялдан ҡәнәғәтлек алығыҙ. Тирә-яҡ мөхит ысынбарлығының байлығына иғтибар итегеҙ. Хистәрегеҙ тәбиғәттең барлыҡ матурлығын һәм һауаның сафлығын үҙенә һеңдерһен. Йәшлектәрен нисек итеп һаҡлап ҡалыу сәнғәте серенә төшөнгән күптәр көн дә урамда саф һауала йөрөүҙе ғәҙәт итеп алған.

52. Гимнастика залында күнекмәләрҙе ауырлыҡ күтәреүҙән башлағыҙ. Көслө кешеләр - рухы ныҡлы кешеләр улар. Йылдар үтеү менән дә һеҙ физик көсөгөҙҙө лә, рухи көсөгөҙҙө лә юғалтырға тейеш түгелһегеҙ. 75 йәшлек ир-аттың марафонда йүгереүе, 80 йәшлек ҡатындың бейек тауҙарҙы яулауы, 90 йәшлек бабай-әбейҙәрҙең тулы ҡанлы тормош менән йәшәү миҫалдары бар. Һеҙгә нисә йәш булыуы мөһим түгел - 19-мы, 93-мө - һәр саҡ физик формала ҡалығыҙ һәм тормошҡа булған дәртегеҙ һүрелмәһен.

53. Бер ваҡытта ла кеше менән бәхәсләшмәгеҙ - һеҙ ябай бәхәскә ҡарағанда күберәкте юғалтасаҡһығыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 4 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Ты не один". Сериал (16+)
16.20 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Грач". Военная драма, 1-я и 2-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (18+)
01.10 Ночные новости
01.30, 03.05 "Плохая компания". Боевик (16+)
03.00 Новости
03.45 "24 часа" (16+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 " Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Тайны института благородных девиц", 16-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Тайны следствия-11". Сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
